*✓ Йәшәй белеү сәнғәте - ул тейешле поезға ултырыу ғына түгел, ә тейешле туҡталышта төшөп ҡала белеү ҙә.*

*(А. Зигфрид).*


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

18 - 24 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№20 (542)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Һеҙҙән әсәйемдең есе килә...**



3

**Матурлыкты тойоу өсөн...**



күңелендә матурлыҡ булырға тейеш

6,11

**Әйберләтә яҙма, көш теле...**



8-9 Халҡыбыҙҙың иң боронғо яҙмалары тураһында һүҙ башлау

**Ҡуян ҡурҡаҡмы?**



12

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй Президенты Владимир Путин ваҡытлы матбуғат сараларында әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙе ҡулланған өсөн административ штраф һалыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Ә һеҙҙең был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек?

**Рөстәм ЙӘМИЛЕВ, банк хеҙмәткәре:** Кеше ни өсөн бындай һүҙҙәрҙе ҡуллана? Кемдер һүҙлек запасының бик әҙ булыуын ошо рәүешле тултырырға маташа, икенселәр һүгенеү аша үҙенең мәйһеҙлеген, мәмәйлеген, көсһөҙлөгөн ҡапларға тырыша. Ә бала сағынан ошондай әҙәпһеҙ, мәғәнәһеҙ һүҙҙәрҙе ҡулланыусылар араһында үҫкәндәр башҡаса аралашыуҙы күҙ алдына ла килтермәҫкә мөмкин, сөнки был күренеш улар өсөн тәбиғи һанала. Шуға күрә һүгенеүҙе төбө-тамыры менән юҡ итеү, минеңсә, мөмкин булмаған хәл, ләкин был уның менән көрәште туҡтатырға кәрәк, тигәнде аңлатмай. Тамсы тама-тама ташты тишә, тигәндәй, әҙәпһеҙлеккә ҡаршы һәр сара үҙенең ыңғай һөҙөмтәһен бирмәй ҡалмаясаҡ.

Минең ҡарашҡа, бөгөнгө көндә йәмғиәт үҙен, алдағы йылдар менән сағыштырғанда, мәҙәниәтлерәк тота һәм һүгенеү һүҙҙәрен киң ҡулланмай. Хәҙер бөтә тарафта ла ыңғай ваҡиғаны, күренеште, тәртипте алға ҡуйыу һәм шуға ынтылыу тенденцияһы ята. Мәҫәлән, сәләмәт тормош алып барыу "модаһы", тәмәке культының юғала барыуы, иҫерткес эсемлектәргә ҡарата битарафлыҡ менән бер рәттән, һүгенеү һүҙҙәрен ҡулланыуҙың да "мәртәбәһе" төштө. Быны социологик тикшереүҙәр ҙә иҫбатлай. "Йәмәғәт фекере" фонды ойоштороған ошондай тикшереүҙәрҙең береһенә ярашлы, бөгөнгө көндә һүгенеүселәрҙең һаны кәмегән. Мәҫәлән, 2003 йылда респонденттарҙың 53 проценты - үҙҙәренең, ә 70 проценты янындағыларҙың даими рәүештә һүгенеү һүҙҙәрен ҡулланыуы хаҡында белдергән, хәҙер иһә улар, ярашлы рәүештә, 33 һәм 61 процент тәшкил итә. Әлбиттә, айырма күп түгел, шулай ҙа ыңғай күренеш күҙгә бәрелә. Тимәк, оҙаҡламай йәмғиәтебеҙҙең әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙән бөтөнләй тиерлек арыныуына һәм таҙарыныуына өмөт итергә була.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### КӘҢӘШ ҠОРО

# ҒАИЛӘ ХӘЛЕН...

## дәүләт тә хәстәрләһен, тип

**Өфөлә "Рәсәй ғаиләһе: ата-әсәлек ҡыуанысы, бәхетле бала саҡ, аҡыллы ҡартлыҡ" бөтә Рәсәй конгресы булып үтте. Унда ҡатнашыусылар ғаилә институтын нығытыу, оло йәштәге граждандарға социаль ярҙам күрһәтеү мәсьәләләрен, илдә ғаилә сәйәсәтен үҫтереү стратегияһын һәм уның закондар менән тәьмин ителешен тикшерҙе.**

БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова билдәләүенсә, ғаилә сәйәсәтенең көнүҙәк мәсьәләләрен хәл итеү буйынса уртаҡ позициялар булдырыу өсөн власть, фән, йәмәғәтселектең барлыҡ тармаҡтарын берләштереү фарыз. Был тәңгәлдә ҡоро һүҙҙән анығ эшкә күсеүҙәр күҙәтелә. Ғөмүмән, балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы күрһәтеү республикалағы социаль сәйәсәттең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе булып тора. "Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа демографик хәл тотороҡло үҫеш ала. 2012 йылда тыуым - 5,1 процентҡа, халыҡтың тәбиғи артыуы 3,5 тапҡырға артты. Балалы ғаиләләрҙе социаль яҡлау буйынса әүҙем эш алып барыла. Бөгөн республикала 170 меңдән ашыу балалы ғаилә 20 төрҙән ашыу финанс ярҙамы ала", - тип хәбәр итте Лилиә Ғүмәрова.

БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары шулай уҡ ғаилә абруйының төшөүе, ғаилә мөнәсәбәттәрендә рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм тергеҙеү, бала тәрбиәләү мәсьәләләренә иғтибар йүнәлтте. Шундай мәғлүмәттәр уйға һала: Башҡортостанда 30 мең ғаиләнең 16 меңе тарҡала. Айырылышыуҙарҙың өстән бер өлөшө йәш парҙарға тура килә. Бөгөн йәштәр граждандыҡ никаһын өҫтөн күрә. Һәр бишенсе бала никахтан тыш тыуған. Балалар йорттарында тәрбиәләнгән малай һәм ҡыҙҙарҙың 90 процентының ата-әсәһе бар.

Конгресс барышында ошо һәм башҡа мәсьәләләр тикшерелде. Унда Рәсәйҙең алдынғы ғалимдары, йәмәғәт һәм дәүләт эшмәкәрҙәре ҡатнашты.

**"Башинформ".**



"Беҙҙең ғаилә". Тәнзилә Ғәйфуллина.

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН




# ЯРЛЫ БУЛҺАМ ДА...

## минән дә бай кеше юҡ

**Алдан уҡ шуны әйтке килә: йәүкә телефоныбыҙға һеҙҙең яҡтарҙа булған теге йәки был ҡыҙыҡлы ваҡиғалар тураһында ғына түгел, ә башҡаларға ыңғай тәьҫир итә алырҙай кәйефегеҙ, фекерегеҙ, күңел торошоғоҙ тураһында ла шылтыратып хәбәр итә алаһығыҙ. Бына әле беҙҙе Хәйбулла районы үҙәге Акъярҙан Рәфҡәт Рәхмәтуллин атлы аҡһаҡал йәшенә еткән ир-уҙаманы шылтыратып ҡыуандырҙы. Уның һөйләгәндәрен тыңлағанда, ысынлап та, үҙеңде шатлыҡ атына атланғандай итеп тояһың.**

Беҙҙең гәзитте күптәндән алдырып, яратып уҡып бара икән Рәфҡәт ағай. Уның йәшен билдәләгәндә, "аҡһаҡал" һәм "ир-уҙаман"һүҙҙәренең йәнәш тороуының бер хикмәте лә бар: ғүмере буйы табип булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан Рәфҡәт Рәхмәтуллиндың 77 йәшендә лә йәштәрсә дәртле, шаян булып ҡала, һаҡлана белеүе уның күңел торошонан, рухи булмышынан, ҡыҫҡаһы, оптимизмынан килә торғандыр. Шуға ла ул бер үк ваҡытта аҡһаҡал да, ер һелкетеп баҫып йөрөүсе ир-уҙаман да.

-Һеҙгә генә әйтә торған һүҙҙәрем бар ине, - тип башланы ул һүҙен, - бәлки, уларҙы "Киске Өфө"нөң сит-ботонда ғына урын табып, ҡыҫтырып ебәрерһегеҙ. Мулла ҡушҡан исемем Рәфҡәт булһа ла, асылымда мин Ярлыбай. Ни өсөн Ярлыбаймы? Сөнки мин ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуғанмын. Аслы-туҡлы көйө уҡып, юғары белем алдым. Аслыҡта-ялanғаслыҡта үткән йылдарым хаҡында яҙа башлаһам, бик күп хәтирәләргә төшөргә тура киләсәк, шуға унда төшөп тормайыҡ, төшһәк, сыға алмаҫбыҙ. Һе, ас көйгә сығып ҡара ул михнәтле йылдар упҡынынан.

Исемемдең икенсе яртыһы - Бай, йәғни мин үҙемде хәҙер бик бай һанайым. Аслы-туҡлы, ыштанһыҙ, әтмәкәй, балтырған, мысай үләне ашап үҫкән, һуғыштан биш йыл алда тыуған малай хәҙер Бай, сөнки уйҙарым, хистәрем, этләнеп алған юғары аҡылымды, белемемде, Аллаһы Тәғәлә биргән 77 йыл ғүмеремде, һаулығымды, балаларымды һәм ейән-ейәнсәрҙәремде оло байлыҡ тип һанайым, шуларға шөкөр итеп йәшәйем.

Алла бойорһа, июнь айында миңә 77 йәш тула. Быны бик оҙон ғүмер тип һанайым. Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтлемен, Уға ризамын. Тағы ла күпме ғүмер биргәндер - быныһы инде уның эше. Шөкөр итергә кәрәк. Беҙҙең халыҡ шөкөр итә белмәй, шуға үҙемдең шөкөр итә белеү өлгөмдө һеҙҙең гәзит аша башҡаларға ишеттермәксе генә булғайным...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Илебеҙ һәм республикабыҙ менән беҙ эскелеккә һәм тәмәке тартыуға ҡаршы әүҙем көрәш башланыҡ. Ә Ярлыбай-Рәхмәтулла Рәфҡәт был изге ғәмәлгә район дауаханаһында табип булып эшләгән сағында тотонған. Ул әгәр ҙә тәмәке еҫе борҡоп торған егет килеп, рентген аппараты янына баҫһа, күрһәтмәй генә рентген яҙмаларына тәмәке төпсөгөн ҡәләм менән төшөрөп: "Бына, ҡара, эсеңдә тәмәке төпсөгө ята, артабан тартыуыңды ташламаһаң, үләһең", - тип ҡурҡытҡан. Ә инде эсергә яратыусыларҙың рентген яҙмаларына араҡы шешәһенең бөкөһөн төшөрөп ҡотон алған. Ташлаған тегеләр тартыуын да, эсеүен дә...**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Рәсәй Президенты Владимир Путин ваҡытлы матбуғат сараларында әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙе ҡулланған өсөн административ штраф һалыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Ә һеҙҙең был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек?

**(Башы 1-се биттә).**

***Руслан ҒӘЛИМОВ, дәүләт хеҙмәткәре:*** Яңы законды хуплайым, сөнки һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыуға кире ҡараштамын. Бигерәк тә ундай һүҙҙәрҙе йәмәғәт урындарында ишетеү күңелде ҡыра. Дуҫтары менән урамда китеп барған һәм телмәрендә һүгенеү һүҙҙәре ҡулланған йәштәр өйҙәрендә, ата-әсәһе янында ла үҙен ошолай тоталыр, тип уйламайым. Бындай ҡыланыштың башҡаларға ҡарата ихтирамһыҙлыҡ була икәнен мин үҙем балалыҡ, йәшлек осоронан сыҡҡас ҡына аңланым, ә элек һөйләшеүҙә һүгенеү һүҙҙәрен ҡыҫтырып ебәреү үҙемде өлкәнерәк тойорға булышлыҡ иткән кеүек ине. Үҙемдең ҡасандыр ошолай ҡыланыуым, бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда, ҡырағайлыҡ кеүек күренә. Ғөмүмән мәктәп, студент йылдарында һүгенеү, айырыуса малайҙар араһында, үҙеңде йәмғиәттең бер өлөшө итеп күреүгә, йәштәштәрең тарафынан ситкә ҡағылмаҫҡа булышлыҡ итә, тип һанала. Быны аңлау өсөн ваҡыт кәрәк. Ҙурая барған һайын әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙең кешене матурламауын яҡшыраҡ төшөнәһең һәм телмәрҙә ҡулланмаҫҡа тырышаһың. Минеңсә, һүгенеүҙән ҡотолоуға шулай уҡ бәләкәй бала ла "ярҙам" итә, сөнки бер кем дә балаһы ауыҙынан ошондай әшәке һүҙҙәрҙең яңғырауын ишетергә теләмәй һәм үҙенең телмәренән дә алып ташлай. Шуға күрә ата-әсәләргә, ғөмүмән, ололарға теләгем шул: балағыҙҙың ауыҙынан һүгенеү һүҙе сыҡты икән, балалар баҡсаһын, мәктәпте йәки дөйөм йәмғиәтте ғәйепләргә ташланмағыҙ, ә тәү сиратта үҙегеҙҙең телмәрегеҙгә күҙ һалығыҙ. Ниндәйҙер законға ҡарағанда, шәхси өлгөнөң тәьҫир итеү көсө күпкә артығыраҡ икәнен онотмайыҡ.

***Моразым АЙСЫУАҠОВ, дин белгесе:*** Изге Ҡөрьәндә кешенең һәр әйткән һүҙе фәрештәләр тарафынан яҙылып барылыуы тураһында әйтелә. Беҙҙең бер кәлимәбеҙ ҙә елгә осмай, уларҙың һәр береһе өсөн яуап тотаһы бар. Ә инде һүгенеүҙәргә килгәндә, уларҙы телмәребеҙҙә ҡулланыуҙы Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡәтғи рәүештә тыйған. Бихисап хәҙис-шәрифтә әшәке һүҙҙәр һөйләүсе, һүгенеүсе өсөн йәннәт ишектәре ябыҡ булыуы хаҡында бәйән ителә.

Шартлы рәүештә һүгенеү һүҙҙәрен ике төркөмгә бүлергә була. Беренсеһенә ингән кәлимәләрҙең әҙәпһеҙлек билдәһе булыуын һәммәһе лә белә, үҙен, яҡын-тирәләге кешеләрҙе хөрмәт иткән кеше уларҙы ҡулланыуҙан тыйыла. Ләкин икенсе төр һүгенеүҙәр ҙә бар. Тышҡы формаһын бер аҙ үҙгәртеүе арҡаһында, йә телдә был һүҙҙәрҙең яңы эквиваленттары барлыҡҡа килеүе сәбәпле, күптәр уларҙың айышына төшөнөп етмәй. Был һүгенеү һүҙҙәре шул тиклем нейтралләшеп бөткән, үҙен әҙәпле, мәҙәниле тип һанаған ата-әсә лә, киң йәмәғәтселек алдында сығыш яһаған зыялы ла, дәрес ваҡытында уҡытыусылар ҙа, дин тотҡан кешеләр ҙә уларҙы ҡулланыуҙы әҙәпһеҙлек тип тапмай. Ә бит был һүҙҙәрҙең мәғәнәләре, шул уҡ енес ағзаларын, уйнаш ҡатындарҙың ҡылыҡтарын һ.б. аңлата.

Икенсе төркөмгә ҡараған бер һүҙ һәм ым хаҡында әйтеп китмәксемен. Күп ата-әсәләр балаларын бәләкәйҙән ҡуҡыш күрһәтергә өйрәтә. Зыянһыҙ шөғөл кеүек. Ләкин... Был ым ир-егеттәрҙең енес ағзаһын, ә ошо ымды тасуирлаған һүҙ немец телендә зина ҡылырға саҡырыуҙы аңлатыуын ата-әсәләр белә микән? Германияла фәхишәләр бөгөн дә клиенттарын ошо ым менән "йәлеп" итә. Нисек кенә булмаһын, һүгенеүҙең оло гонаһ икәнен белергә тейеш һәр кем.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылып, һеҙ баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләйһегеҙ, туған телгә, мәҙәниәткә тоғролоҡто, ихтирамды, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтәһегеҙ икәнен иҫегеҙҙән сығармаһағыҙсы.**

• Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була.



Майҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ Гүзәл Ситдиҡованың **"Күсле ил - көслө ил"**, 10 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның **"Көҙгө ысыҡ"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• **Тағы.** Гәзитебеҙгә бар йәмәғәт менән яҙылған Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өлгөһөнә эйәргән ауылдарға, коллективтарға **"Кескәй китапхана"** бүләк итәбеҙ. Был китапханала **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Ҡөрьән-Кәрим"**, С. Руденконың **"Башҡорттар"**, **"Башҡорт костюмы"** баҫмалары, Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"** һәм башҡа китаптар бар.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитов Волга буйы федераль округы делегацияһы составында Ҡытай Халыҡ Республикаһында булды. Визит барышында Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһының презентацияһы менән сығыш яһаны, Ҡытай провинциялары менән үҙа-ара килешеп эш итеү мөмкинлектәре тураһында һөйләне. 2012 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан менән Ҡытай араһында тышҡы сауҙа әйләнеше 609,8 миллион АҠШ доллары тәшкил итте, шул иҫәптән экспорт - 483 миллион доллар, импорт - 126,8 миллион доллар. Башҡортостандың дөйөм тышҡы сауҙа әйләнеше күләмендә Ҡытай алтынсы урында тора.

✓ Мәскәүҙә, Ҡаҙағстан һәм Төркиәнең Рәсәйҙәге илселектәрендә, Башҡортостан үҙенең инвестицион һәм иҡтисади мөмкинлектәре менән таныштырҙы. Башҡортостан исеменән республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалав һәм башҡа рәсми кешеләр сығыш яһаны. Башҡортостан делегацияһы Ҡаҙағстан Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Галым Оразбаков, шулай уҡ Ҡаҙағстандың эшлекле даирәһе һәм киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән осрашты. Галым Оразбаков Ҡаҙағстан ҡалалары менән Өфө араһында тура авиабәйләнеш булдырыу, шулай уҡ Астанала Башҡортостан Республикаһының сауҙа үҙәген асыу мөмкинлектәрен тикшерергә тәҡдим итте.

✓ Башҡортостандың презентацияһы Төркиәнең Рәсәйҙәге илселегендә үтте. Республика делегацияһын Төркиә Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Тулы хоҡуҡлы илсеһе Айдын Сезгин сәләмләне. Осрашыуҙа шулай уҡ Төркиәнең бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ вәкилдәре, ҙур предприятие етәкселәре, бизнес вәкилдәре ҡатнашты. Осрашыу йомғаҡтары буйынса артабан хеҙмәттәшлек итеү мөмкинлектәрен тикшереү өсөн Төркиә Республикаһы делегацияһының Өфөгә визитын ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителде.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2012 йылдың 16 майындағы Указы менән быға са БР Дәүләт торлаҡ инспекцияһы начальнигы вазифаһын биләгән Илдар Замалетдиновты Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләне. Республика башлығының икенсе Указы менән БР Дәүләт торлаҡ инспекцияһы Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты итеп үҙгәртелде.

*✓ Уҡытыусы һаман да, бөтәгеҙҙе лә бер тиң күреп яратам, тиһә лә, өсөнсө рәттең беренсе партаһы артында ултырған баланы ул башҡаларҙан яҡыныраҡ күрә ине.*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# ҺЕҘҘӘН ӘСӘЙЕМДЕҢ ЕҪЕ КИЛӘ...



Беренсе сентябрь. Яңы уҡыу йылының тәүге көнө. Етенселәрҙең класс етәксеһе балалар алдында баҫып тора. "Һеҙҙе күреүемә бик тә шатмын. Бөтәгеҙҙе лә һағындым, һәммәгеҙҙе лә бер тиң күреп яратам", - ти уҡытыусы. Әммә ул алдаша, сөнки өсөнсө рәттең беренсе партаһы артында ултырған малайҙы ул бөтөнләй оҡшатмай. Былтырғы уҡыу йылы башында тәү күргәндән алып был балаға ҡарата күңеле һүрелде. Өҫтө бысраҡ, үҙенән йыл буйына йыуынмағандай һаҫыҡ еҫ килә. Класташтары менән аралаша һалып бармай, һәр саҡ ситтә булырға тырыша. Уҡыуының да рәте юҡ. Эш шуға барып етте: уҡытыусы был һөмһөҙ баланың контроль эштәрен тикшергәндә, сыҙамлығы етмәй, дәфтәр битен арҡырыбуйға ҡыҙыл ручка менән сыйғыслап, "бер" билдәһе ҡуйыуҙан ләззәт таба башланы. Унан нисек тә булһа ҡотолор өсөн педсоветта өлгәшмәүсе уҡыусыны икенсе йылға ҡалдырыуҙарын һораны, әммә мәктәп администрацияһы ҡаршы килде. Бына ул яңы уҡыу йылы башланыу йәмен ебәреп, тағы элекке урынында бер ни булмағандай бөршәйеп ултыра...

Бер көн мәктәп завучы балаларҙың һәр йыл яҙыла килгән характеристикаларын уҡып, анализ яһарға ҡушты. Билдәле, уҡытыусы яратмаған уҡыусыһының "Личное дело"һын иң аҙаҡҡа ҡалдырҙы. Теләртеләмәҫ кенә баланың ҡығыҙҙарын аҡтара башлағас, шаҡ ҡатты.

"Йөҙөнән йылмайыу китмәгән был нурлы баланы уҡытыу үҙе бер ләззәт. Өйгә бирелгән эштәрҙе ул бик теүәл һәм йыйнаҡ эшләй", - тип яҙған уның тураһында беренсе синыфта уҡытҡан уҡытыусыһы.

"Был тәрбиәле баланы класташтары хөрмәт итә, тик уның ғаиләһендә проблемалар бар: әсәһе үлемесле ауырый" - быныһы икенсе синыфты тамамлағас яҙылған.

"Әсәһенең үлемен бала бик ауыр кисерҙе. Ул хәленән килгәнсе тырыша, ләкин атаһы яғынан балаға бөтөнләй иғтибар юҡ. Ошолай дауам итһә, балала уҡыуға ҡыҙыҡһыу юғаласаҡ ", - тип яҙылған өсөнсө синыфта.

"Баланы уҡыу ҡыҙыҡһындырмай, хатта дәрес ваҡытында йоҡлап киткән осраҡтары була. Өйгә эштәрен бөтөнләй эшләмәй. Дуҫтары юҡ, класташтары менән аралашмай" - был дүртенсе синыф уҡытыусыһының яҙмаһы.

Был яҙмаларҙы уҡығас, уҡытыусыға бик тә уңайһыҙ булып китте. Яңы йыл байрамы алдынан уҡытыусы үҙен тағы ла уңайһыҙыраҡ тойҙо. Бөтә балалар ҙа уҡытыусыға матур-матур ҡағыҙҙарға төрөп бүләк биргәндә әлеге уҡыусы ла һарғайып бөткән ҡағыҙға төрөлгән бүләген килтереп тотторҙо. Әлбиттә, был күренешкә балалар көмәкләп көлөргә тотондо. Уҡытыусы уларҙы тыйҙы ла төргәкте ипләп кенә асты. Ҡағыҙ эсенән бер нисә ташы төшкән беләҙек һәм дүрттән бер өлөшө бушаған хушбуй һауыты килеп сыҡты. Уҡытыусы беләҙекте ҡулына таҡты, хушбуй флаконын еҫкәп ҡараны.

- Ниндәй матур беләҙек, ә был хушбуй еҫе миңә бик тә оҡшай, - тине ул, һоҡланыуын йәшермәйенсә.

Был көндө уҡыусы дәрес аҙағында класс етәксеһе эргәһенә килде.

- Һеҙҙән минең әсәйемдең еҫе килә, - тине ул.

Малай кабинеттан сыҡҡас, уҡытыусы оҙаҡ иланы. Шунан башлап ул балаларға тел һәм әҙәбиәт дәрестәре биреү менән генә сикләнмәне, уҡыусыларын изгелеккә өйрәтте, мәрхәмәтлек тураһында йышыраҡ һөйләй башланы.

Йайлап ҡына һөмһөҙ күренгән баланың күҙҙәрендә нур сатҡылары уянды, уҡытыусының иғтибары артҡан һайын, баланың уҡыуы ла яҡшыра башланы. Уҡыу йылы аҙағына ул кластағы иң яҡшы уҡыған балалар рәтендә ине.

Уҡытыусы һаман да, бөтәгеҙҙе лә бер тиң күреп яратам, тиһә лә, өсөнсө рәттең беренсе партаһы артында ултырған баланы ул башҡаларҙан яҡыныраҡ күрә ине.

Киләһе уҡыу йылына уҡытыусыға икенсе класты бирҙеләр һәм уның иғтибары башҡа балаларға күсте. Әммә бер көндө ул кабинетындағы өҫтәлдә таныш почерк менән яҙылған ҡығыҙ киҫәге тапты. "Бөтә уҡытыусыларға ҡарағанда, һеҙ минең иң яратҡан уҡытыусым", тип яҙылғайны унда.

Биш йылдан уҡытыусы элекке уҡыусыһынан хат алды. Үҫмер егет колледж тамамлауы тураһында яҙған һәм аҙаҡтан: "Һеҙ һаман да минең иң яратҡан уҡытыусым", - тип өҫтәп ҡуйған.

Биш йыл үткәс, егет университет тамамлауы тураһында хәбәр итте һәм яратҡан уҡытыусыһына хат аша рәхмәтен еткерҙе.

Тағы дүрт йылдан уҡытыусы уҡыусыһынан хат алды. Был юлы фамилия алдына фән докторы исеме өҫтәлгәйне. Был хатын да ул "Ҡайҙа ғына уҡыһам да, һеҙ минең иң яратҡан уҡытыусым булдығыҙ", тип тамамлаған.

Ваҡыт үтә тора уҡытыусыға уҡыусыһынан хаттар туҡтаманы. Сираттағы хатында егет бер ҡыҙ менән танышыуы, тиҙҙән туйҙары булырға тейешлеге тураһында яҙҙы. Атаһы ла үлгәс, ул яңғыҙ ҡалған. "Кейәү егете яғынан әсәй урынында туйҙа ҡатнаша алмаҫһығыҙмы?" тип һорағайны элекке уҡыусыһы. Әлбиттә, уҡытыусы ҡыуанып риза булды.

Туй көнөнә уҡытыусы ҡасандыр уҡыусыһы яңы йылға бүләк иткән беләҙекте кейҙе, магазиндан шул осорҙағы хушбуй һатып алды.

Уҡыусы менән уҡытыусы осрашты. Уҡытыусыһын ҡосаҡлағанда егет үҙен әсәһенең янында булғандай тойҙо.

- Һеҙ мине изгелекте яуызлыҡтан айырырға, көсһеҙ сағымда үҙемә ышанырға өйрәттегеҙ, - тине уҡыусы.

- Яңылышаһың. Киреһенсә, һин мине дөрөҫ йәшәргә өйрәттең. Һине осратҡанға тиклем мин нисек уҡытырға белмәй инем, - тине уҡытыусы, күҙ йәштәрен йәшермәйенсә.

Был - кинәйә. Бындай хәлдең булыуы ла, булмауы ла мөмкин. Бәлки, бындай хәлдәр меңәр тапҡыр ҡабатланғандыр ҙа. Ни өсөн тигәндә, бынан мең йыл элек тә, киләһе меңәр йыллыҡтарҙа ла уҡытыу-тәрбиә эшендә уҡытыусы-уҡыусы мөнәсәбәте иң беренсе урында торасаҡ. Күпме генә яңы технологиялар, методик алымдар уйлап табылһа ла, асыл шул килеш ҡала: уҡытыусы уҡыта, уҡыусы белем эстәй. Хатта былай тип әйтеү ҙә дөрөҫлөккә тап килеп етмәй, улар икеһе лә уҡый, бер-береһен тулыландыра. Уҡытыусы белемен камиллаштырмаһа, мәктәп программаһы сиктәрендә генә фекер йөрөтһә, үҙе уҡыусы кимәленә төшә, уҡыусы уҡытыусыһы артынан эйәрмәһә, бер кимәлдә ҡатып ҡала. Кинәйәлә әйтелгәнсә, уҡытыусы уҡыусыһына ҡарата мөнәсәбәтен үҙгәртмәһә, үҙе лә үҙгәрмәҫ ине.

Һәр бер дәрес, ғөмүмән, мәктәп тормошо - ғәжәйеп донъя. Бер үк программалар, методик ҡулланмалар, бер үк дәреслектәр менән шөғөлләнгән хәлдә лә, һәр мәктәптең үҙенә генә хас йолалары, потенциалы бар. Быны аңлау, йолаларға тоғро булыу һәр мәктәптең йөҙөн билдәләй ҙә инде.

Уҡытыусылар ҙа бер-береһенән ныҡ айырыла. Белем кимәленә ҡарап түгел, ә балаларға ҡарата булған мөнәсәбәтенә ҡарап айырыла улар бер-береһенән. Талапсан, тик үҙ предметын ғына беренсе урынға ҡуйған уҡытыусылар була. Класты дер ҡалтыратып тотҡан уҫалдар бар, балаларын елкәһендә йөрөткән йыуаштар ҙа осрай. Әммә ни генә булмаһын, уҡытыусы һәм уҡыусы икеһе бер донъя: уҡыусыһыҙ уҡытыусы юҡ һәм - киреһенсә.

Дәрестәр ҙә бит "ултыр - ике", "маладис - биш"тән генә тормай - һәр бер дәрес тормоштоң бәләкәй генә киҫәге лә баһа.

Уҡытыусыға ҡарата булған мөнәсәбәтенә ҡарап, уҡыусылар ҙа айырыла бер-береһенән. Насар уҡығандар бар, көскә-көскә өлгәшкәндәр, уртаса уҡығандар һәм гел "бишлегә" өлгәшкән отличниктар ҙа бар. Шуларҙың ҡайһыларына иғтибар күберәк бүленә? Әлбиттә, яҡшы уҡығандарға һәм насар уҡығандарға. Отличниктар маҡтала, бүләкләнә, өлгәшмәгәндәрҙе оялтып тәрбиәләйҙәр, әрләйҙәр. Ошо ике контингент һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә. Ә күпселекте тәшкил иткән уртаса уҡығандарға мөнәсәбәт ниндәй? Улары үҙаллы тормош менән йәшәй кеүек. Спорт, сәнғәт, башҡа өлкәләрҙә үҙҙәрен күрһәтһәләр, әлбиттә, ундайҙарға ла иғтибар арта төшә.

Хәйер, бер-береңә иғтибарлы булыу тик мәктәп тормошона ғына хас күренеш түгел, һәр кеше иғтибарға һыуһап йәшәй.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уҡытыусы менән уҡыусы араһындағы мөнәсәбәт һәммәбеҙгә лә таныш. Бәлки, һеҙҙең тормошоғоҙҙа ла ошо кинәйәләге ваҡиғаларға оҡшаш хәлдәр булғандыр. Кинәйәне киңәйтеп, үҙ фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ, бик тә шат булыр инек.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓19 майҙа Өфөлә "1000 велосипедсы көнө" үтә. Был байрам баш ҡалала өсөнсө тапҡыр үткәрелә. Тәүге велоуҙышта 350 кеше ҡатнашһа, бер йылдан һуң уларҙың һаны дүрт тапҡырға тиерлек артты. Былтыр марафонда 1300 кеше ҡатнашты, быйыл иһә унда 3500 кеше ҡатнашыр тип көтөлә. Веломарафон 12.30 сәғәттә Өфө ҡала Советы янынан старт алып, ҡаланың үҙәк урамдары буйлап үтәсәк. Велосипедсылар Конгресс-холдың спорт майҙансығына тиклем юл үтәсәк. Унда төрлө спорт ярыштары, конкурстар, уйындар ойоштороласаҡ. Байрамда теләгән һәр кеше ҡатнаша ала.

✓Өфөлә III "Гагарин көндәре" республика балалар-үҫмерҙәр фестивале үтте. Унда ҡатнашыу өсөн республиканың баш ҡалаһына Рәсәй Космонавтика федерацияһы делегацияһы килде. Ҡунаҡтар Юрий Гагарин бюсына сәскәләр һалды, мәктәп уҡыусылары менән осрашты, Еңеү паркында Мәңгелек утҡа сәскәләр һалды һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын "Хәрби һауа көстәренә 100 йыл" ордены миҙалы менән наградланы. Быйылғы фестивалдең үҙенсәлеге шунда: Рәсәй Космонавтика федерацияһы президенты башланғысы менән Өфөгә тәүгә Мәскәүҙән Еңеү байрағы килтерелде.

✓"Айыҡ ауыл-2013" республика конкурсында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итеү тамамланды. Конкурсҡа март айында старт бирелгәйне. Бөгөнгө көнгә Башҡортостан ауылдарынан йәмғеһе 50-нән ашыу ғариза ҡабул ителгән. Урал аръяғы ауылдары айырыуса әүҙемлек күрһәтә. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан "Айыҡ ауыл" конкурсында әүҙем ҡатнашҡан һәм еңеү яулаған ауылдар өсөн аҡсалата приздар ҡаралған. Средстволарҙы ауыл өсөн кәрәкле мөлкәт һатып алыуға йүнәлтергә мөмкин.

✓"Башҡортостан" сауҙа үҙәгенең икенсе ҡатында ғәҙәти булмаған зоопарк асылды. Унда 30-ҙан ашыу хайуанды күрергә була. Улар араһында кәзә, һарыҡ, сусҡа бәрәстәре, себештәр, декоратив тауыҡтар, гөбөргәйелдәр, шулай уҡ ҡуяндар, диңгеҙ сусҡалары, ҡырғауыл, мысыр тауығы һәм хатта страус та бар. Улар барыһы ла Екатеринбургтан килтерелгән. Зоопарк ял көндәрһеҙ һәм тәнәфесһеҙ 10.00-21.00 сәғәттәрҙә эшләй.

**"Башинформ"дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# УН ӨС ҺАНЫН...

## бәхеткә юрайыҡ!

**Ҡояш үҙенең йылы нурҙарын ер өҫтөнә йәлләмәй һибә башлау менән барлыҡ тереклек уяна, донъя йәмләнә һәм күңел үҙенән-үҙе тәбиғәткә тартыла. Ауыл халҡы өсөн, әлбиттә, быға әллә ни мохтажлыҡ юҡ, ә бына матур көндәрҙә фатирының дүрт стенаһы артында ултырырға телмәгән (бигерәк тә йәштәр һәм үҙ баҡсаһы булмаусылар) ҡала кешеһе саф һауаға, һыуға сарсағандай, йылға-күл буйҙарына ашҡына.**

Эйе, тиҙҙән - 1 июндән - баш ҡалала һыу инеү урындары рәсми асыласаҡ. Был хаҡта сираттағы матбуғат конференцияһында ҡала округының "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" МБУ директоры Хәким Ниғәмәтйәнов белдерҙе. Быйыл өфөләләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары махсус әҙерләнгән 13 һыу сығанағы буйында ял итә аласаҡ. Улар - Ағиҙел йылғаһы акваторияһында "Ҡояшлы" һәм "Ағиҙел" (Киров районы), "Нижегородка" һәм "Затон" (Ленин районы) ял зоналары; Ҡариҙел йылғаһы акваторияһында "Ҡояш яры", "Сипайлово түндәре" (Октябрь районы), "Көмло", "Йылға тамағы" (Калинин районы) ял зоналары; күлдәрҙә - "Карьер", Матур күл (Дим районында) , "Ҡашҡаҙан" (Октябрь районы), Йылы күл буйындағы "Гольфстрим" һәм "Ожмах яры" (Калинин районы) ял зоналары. Әлбиттә, ҡала бюджеты был һыу инеү һәм ял зоналарын бер үҙе генә тәртиптә тота алмай, шуға ла пляждарҙың күпселеген шәхси эшҡыуарҙар хеҙмәтләндерәсәк. Ә инде "Ҡояшлы" һәм "Ҡашҡаҙан" ял зоналарын муниципалитет ҡараясаҡ. Ләкин был пляждар насар торошта буласаҡ тигәнде аңлатмай, сөнки элекке йылдарҙа төп иғтибар ял итеүселәрҙең именлеген тәьмин итеүгә һәм билдәле ҡағиҙәләрҙе аныҡ үтәүгә бирелһә, хәҙер Өфөнөң Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы булараҡ статусына ярашлы талаптар ҡәтғиләштерелгән. Дөйөм алғанда, ял зоналарының барыһында ла волейбол, футбол уйнау майҙансыҡтары, балалар майҙансыҡтары, ҡояштан һаҡлаусы зонттар һәм "бәшмәк"тәр булырға тейеш. Шулай уҡ сисенеп-кейенеү урындары, бәҙрәфтәр, сүп-сар ташлау урындары һ.б. булыуы ла мотлаҡ. Пляждарға инеү хаҡы, былтырғыса, 30-40 һум тирәһендә күҙаллана. Шулай уҡ 15 йәшкә тиклемге балалар бушлай һыу инәсәк. Ошо һанап үтелгән ял зоналарының барыһында ла Өфө ҡалаһының Эҙләү-ҡотҡарыу отряды ҡотҡарыусылары һаҡта торасаҡ. Улар киске 10-ға тиклем эшләйәсәк. Әлеге ваҡытта йәмәғәт ҡотҡарыусылары туплана. Улар, нигеҙҙә, УГАТУ студенттарынан торасаҡ. Йәмәғәт ҡотҡарыусылары булырға теләүселәр өсөн шундай талаптар ҡуйыла: ныҡлы сәләмәтлек, йөҙә белеү. Теләге булғандар махсус күнекмәләр үтеп, һуңынан зачет тапшыра һәм махсус таныҡлыҡҡа эйә булғас, тәғәйен урындарҙа эш башлай. Уларға эш хаҡы ла түләнә - яҡынса айына 10 мең һум. Әммә бында иң мөһиме - тап һинең ярҙамың кемдеңдер ғүмерен ҡотҡарып ҡалыуы ихтимал икәнен онотмау.

Әйткәндәй, һыу инеү миҙгеле башланмаһа ла, һыуға батып үлеү осрағы теркәлгән дә инде. Ә дөйөм алғанда, пляждар рәсми асылһа, уларҙа миҙгел дауамында 300 меңгә яҡын кеше ял итә. Хәким Хамат улы белдереүенсә, былтыр рәсми пляждарҙа бер генә кеше лә батып үлмәгән. Шулай ҙа статистика былтыр 31 кешенең һыуға батыу һөҙөмтәһендә яҡты донъя менән хушлашыуын күрһәтә. Уларҙың 29-ы эскән килеш һыу ингән, 9-ы хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен аныҡ үтәмәгән, бер кешенең йөрәге сирле булған. Нигеҙҙә, һыуға батыу осраҡтары халыҡта "ҡырағай" тип аталған, рәсми рөхсәт ителмәгән һыу инеү урындарында күҙәтелгән.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АҒАС УЛТЫРТАЙЫҠ!



**Өфөлә ошо көндәрҙә Башҡортостандың белем биреү учреждениелары араһында "Йәшел мәктәп" экологик проекты старт алды. Проекттың маҡсаты - йәшеллеккә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, ҡырҡылған ағастар урынына яңы үсентеләр ултыртыу, йәмғәтселек иғтибарын был мәсьәләгә нығырак йүнәлдереү. Республикабыҙ мәктәптәрен йәшелләндереү хәрәкәтенә йәлеп итеү идеяһын былтыр көҙ М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының йәштәр советы күтәреп сыҡҡайны. Матур башланғысты Урман хужалығы министрлығы ла хуплаған - үсентеләр менән ярҙам итергә теләк белдергән. Был ғына ла түгел, Башҡортостандың 30 муниципаль районынан 400-ләп белем биреү учреждениеһы кампанияла ҡатнашырға теләк белдереп, ойоштороусыларға хаттар ебәргән.**

Беҙ ҡатнашҡан сарала мәртәбәле ҡунаҡтар - БДПУ ректоры Раил Әсәҙуллин һәм урман хужалығы министры Рәжәп Нәбиуллин, БДПУ волонтерҙары,Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт ҡала гимназияһының бер төркөм уҡыусылары менән берлектә гимназия ихатаһына төүге үсентеләр ултыртты. Урман хужалығы министры быйыл республикала 240 гектар майҙанда 1,2 миллион төп урман культураһы ултыртыласағын һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Республикабыҙҙың 138 ауыл-ҡалаһының 79 мәктәбенә ҡарағай, шыршы, ҡайын, йүкә, гөлйемеш һәм башҡа ағастар үсентеләре ултыртыласаҡ", - тип белдерҙе ул аныҡлабыраҡ.

Был сараға йыйылыусыларҙы бөтә донъяла триллион ағас ултыртыуҙы маҡсат итеп ҡуйған, әлеге көндә төрлө илдәрҙә һәм ҡитғаларҙа 12 миллиардтан ашыу йәш үсенте ултыртыуға өлгәшкән, был изге маҡсатҡа төрлө билдәле кешеләрҙе йәлеп иткән 16 йәшлек бавар малайы Феликс Финкбайнер зәңгәр экран аша сәләмләне. Туғыҙ йәшлек сағында был малай, илһамланып, үҙенең синифташтарына миллион төп ағас ултыртып ҡарарға тәҡдим итә. Шулай итеп, тәүҙә - синифташтарын, аҙаҡ топ-моделдәрҙе, сәйәсмәндәрҙе, эре эшҡыуарҙарҙы был башланғысҡа ылыҡтыра. Тиҙҙән ул ярты донъяны урап сыға. Бөгөн Феликс Финкбайнер БМО вәкилдәрен үҙ телмәре менән таң ҡалдыра, вазифалы кешеләрҙең ишектәрен дә "тибеп" аса: "Беҙгә ҡолаҡ һалығыҙ! Донъяның хужалары - беҙ!" - ти ул трибуналарҙан. "Әлбиттә, бәләкәй генә малайҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмай мөмкинме инде, хатта күп кенә дәүләттәр башлыҡтары ла малай менән яҡшы таныш", тиелә үҙәк баҫмаларҙа. Нимәһе айырыуса иғтибарға лайыҡ - малайҙың һүҙҙәрендә ихласлыҡ ярылып ята, унда киң билдәлелек яулаған йәки ниндәйҙер әһәмиәтле булып күренгән эш башҡарған өлкәндәргә хас тәкәбберлек, һауалылыҡ һыҙаттарының әҫәре лә юҡ.

Өлкәндәрҙең еребеҙҙе һаҡлау проблемаларына битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ күрһәтеүенә ҡаршы көрәшкә күтәрелеүсе Феликс һымаҡ балалар Рәсәйҙә, Башҡортостанда, райондарҙа, ауыл-ҡалаларҙа юҡмы икән ни, тигән һорау тыуа. Барҙыр, тик беҙҙә мөхит, даирә икенсерәктер, бөтөн был башланғыстар, идеялар битарафлыҡ һаҙлығында быуылып ҡына ҡалыр. Хәйер, был турала балаларҙың үҙҙәренең фекерен ишетә алабыҙ. 20-се ҡала башҡорт гимназияһының 11-се синыф уҡыусылары Ғәлиә, Зөһрә һәм Морат менән әңгәмәләшәбеҙ.

**Зөһрә Аҡъюлова:** Тыуҡһанынсы йылдарҙа ниндәйҙер халыҡ-ара кәңәшмәлә бер ҡыҙ бала трибунаға күтәрелеп,ололарҙы экология мәсьәләренә иғ борҙорған, тип уҡығайным. Әле килеп, Феликс тураһында ишеттек. Минеңсә, балаларҙың бөтә донъя өсөн хафаланыуы бер ҙә юҡтан барлыҡҡа килмәйҙер. Ни өсөн балалар үләндәрҙе, ағастарҙы, ҡоштарҙы, хайуандарҙы ярата? Сөнки тәүҙә бала менән тәбиғәт араһындағы күҙгә күренмәс ептәр өҙөлмәгән була. Ҡырыҫ тормош ысынбарлығы менән күҙмә-күҙ, йөҙмә-йөҙ осрашҡас, был ептәр өҙәлә һәм кеше тәбиғәтләген юғалта башлай. Был күҙлектән сығып ҡарағанда, ни өсөн ҡайһы бер илдәрҙә тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәт күҙәтелеүе, ә ҡайһы бер илдәрҙә бындай мөнәсәбәттең аҙ булыуы аңлашыла ла төҫлө. Бына, мәҫәлән, тамаҡҡа йүнле ризыҡ, кейергә кейем, йәшәргә торлаҡ булмаған кешеләр, үҙенең эске принциптарына ҡаршы килеп булһа ла, ер байлыҡтарын тәләфләүгә бара. Рәсәй халҡын мин шундайҙар иҫәбенә индерер инем. Ә ҡайһы бер дәүләттәрҙә йәшәүселәрҙең бындай проблемалары юҡ, уларҙың йәшәү шарттары дәүләттәре тарафынан хәстәрләнә, бындай илдәрҙә экология кеүек мәсьәләләргә лә ныҡлап иғтибар ителә.

**Морат Сәйфуллин:** Үҙ халҡы тураһында хәстәрлек күргән дәүләттең кешеләре генә үҙ иленә, уның территориаль төҙөклөгөнә, ерҙәренең именлегенә, урман-тауҙарының таҙалығына, йылға-күлдәренең сафлығына булышлыҡ итәсәк. Бөгөнгө көндә беҙ халыҡтың ергә, тәбиғәткә мөнәсәбәтен төнҡит утына алыр алдынан дәүләттең үҙ халҡына мөнәсәбәте тураһында һүҙ алып барырға тейешбеҙҙер.

**Ғәлиә Насыртдинова:** Ишетеп белеүебеҙсә, төрлө илдәр экологик проблемалар менән төрлөсә көрәшә. Бөйөк Британияның баш ҡалаһы Лондондың мэры Борис Джонсондың иҡтисади көрсөккә һәм һауаның автомобиль төтөнө менән бысраныуына ҡаршы көрәшеү билдәһе итеп Лондон урамдарында велосипед прокатын киң йәйелдереүен, быға өҫтәп, эшкә дүрт йыл буйына үҙе велосипедта йөрөүен әйтке килә. Ҡала мэрының бындай ҡылығын инглиздәр бик ыңғай ҡабул итә. Әлбиттә, беҙҙең власть әһелдәре лә ошондай саралар менән булһа ла тәбиғәтте һаҡлауға үҙ өлөшөн индерһә, бының ыңғай һөҙөмтәһе оҙаҡ көттөрмәҫ ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө яҙылған-уҡылғандарҙан һуң, бәлки, берәй уҡыусы баҡсаға көрәк тотоп сығырға теләр. Бәлки, һеҙ ҙә, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, тап бөгөн бер төп ағас ултыртырға, тип, ҡыҙығып ҡуйырһығыҙ. Эш ниҙә, әйҙәгеҙ...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Торлаҡ-коммуналь хужалыкты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фонды Башҡортостанға 196,21 миллион һум аҡса бүләсәк. Был аҡса Дүртөйлә, Туймазы, Күмертау, Октябрьский, Стәрлетамаҡ һәм Өфө ҡалаларында урынлашҡан 51 күп фатирлы йортҡа капиталь ремонт үткәреүгә йүнәлтеләсәк. Торлаҡ шарттарын 7887 кеше яҡшыртасаҡ.

✓Өфөлә яңы диализ үҙәге асылды. Әлеге проект Башҡортостан менән нефрология өлкәһендә медицина хеҙмәттәре күрһәтеү буйынса донъяның иң ҙур компанияларының береһе - Швецияның "Diaverum" компанияһы, шулай уҡ Рәсәйҙең гемодиализ өсөн медицина ҡоралдары етештергән "Юнона" холдингы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте араһында шәхси-дәүләт партнерлыҡ сиктәрендә тормошҡа ашырылды. Тулы ҡеүәтенә эшләй башлаһа, клиника, өс сменала эшләп, көнөнә 84 пациентты ҡабул итә аласаҡ. Ауырыуҙарҙы дауалау - бушлай. Инорс биҫтәһендә асылған диализ үҙәге - иҫәп буйынса республикала унынсыһы.

✓Өфөлә һуңғы дөйөм ҡала өмәһе үтте, был территорияларҙы сүп-сарҙан таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса яҙғы айлыҡтың аҙаҡҡы сараһы булды. 2013 йылда экологик айлыҡта ҡаланың барлыҡ ойошмалары, халыҡ мәғарифы, һаулыҡ һаҡлау, төҙөлөш, сәнәғәт һәм сауҙа предприятиелары ҡатнашты. Территорияларҙы санитар таҙартыуға 16 мең берәмек техника йәлеп ителде. Черкассыла ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонына 105 мең кубометр сүп-сар сығарып түгелде.

✓Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы илдәге юғары уҡыу йорттарының конкурентлыҡҡа һәләтен арттырыу өсөн дәүләт ярҙамы алыуға конкурс иғлан итте. Дәүләт тарафынан бүленәсәк аҡса уҡыу йорттарының ғилми-тикшеренеү һәм белем биреү өлкәләрендә эшләү тәжрибәһе булған йәш белгестәрҙе йәлеп итеүгә, аспирантура һәм докторантура эшмәкәрлеген камиллаштырыу буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтеләсәк. Заявкалар 10 июнгә тиклем ҡабул ителә. Еңеүселәр 12 июлгә тиклем билдәләнәсәк.

✓Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда бөгөнгө көндә рәсми рәүештә теркәлгән 26,3 меңдән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә, уларға 58 мең рәсми вакансия тура килә. Рәсми рәүештә теркәлгән эшһеҙлек кимәле апрель аҙағына 1,29% тәшкил иткән. Көсөргәнешлек коэффициенты, йәғни эшһеҙҙәр менән вакансиялар нисбәте 0,5-кә тиң. Дөйөм эшһеҙлек кимәле республикала 6,7% тиң.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Был донъяла иң ҙур бәхетһеҙлек нимә? Был һорауға яуап, тәбиғи, төрлөсә буласаҡ. Кем өсөндөр ул - ярлылыҡта ғүмер һөрөү, кемдәргәлер- артыҡ һимеҙлек; ә бына бәғзе ҡатын-ҡыҙға бәләкәй түштәре лә хатта бәхетһеҙлек булып тойола... Ә шулай ҙа фәҡирҙең фәҡире булһаң да (тырышһаң, байып та китеүең ихтимал), йыуан булһаң да (хәҙер ябығыу ысулдары бик күп), теге йәки был ағзаң оҡшамаһа ла (пластик хирургия ярҙамында ниҙәр генә ҡыланмайҙар бөгөн!) һин бәхетһеҙ түгелһең. Был һинең торошоң, булмышың. Тимәк, ихтыяр көсөң, маҡсатыңа ынтылышың булғанда, ошо торошоңдо үҙең теләгәнсә үҙгәртә һәм шуның менән үҙеңде бәхетле тип иҫәпләй алаһың. Бәхет - ул, тимәк, күңел торошо.**

# ИЗГЕ ЭШТЕҢ...

## иртәгәһе яҡшы

Эйе, күңел торошо ул бәхет. Шулай булмаһа, ауыр сиргә дусар үҫмер больницала ятҡан еренән гәзит хәбәрсеһенә: "Иртәнсәк шәкәр кимәле гел юғары була ине, хәҙер нормала. Мин бик бәхетле!"- тип, үҙенә ярҙам ҡулы һуҙған кешеләргә рәхмәт әйтеп шылтыратмаҫ ине. Был осраҡта ауырыу баланың күңел торошон яҡтыртып, күңеленә нур һибеүселәр кемдәр һуң улар? Республикабыҙҙа эшләп килгән "Изгелек" мәрхәмәтлек фонды тырышлығы менән Сергей Савельевҡа инсулин помпаһы һатып алыу һәм уны ҡуйыу, тейешле материалдар алыу өсөн 186 мең 520 һум күләмендә аҡса йыйылған. Инсулин помпаһы - кеҫә телефоны рәүешендәге аҡыллы һәм ышаныслы махсус прибор, ошо дозатор ярҙамында кеше организмы көнө буйына кәрәгенсә инсулин менән тәьмин ителә. Уның бер инъекцияһы өс көнгә етә, был, тимәк, сирлене 15 тапҡыр укол процедураһы башҡарыуҙан ҡотолдора.Тик шуныһы йәл: был бәхет торошо Сережа өсөн ни бары 12 айға иҫәпләнгән. Аҙаҡ ни буласаҡ - был хаҡта ул әле уйламай, сөнки сирле кешегә бөгөнгөһө ҡиммәт. Йәнә лә ул шуны белә хәҙер: кәрәк булһа, тәүге өндәшеүенән үк ярҙамға килергә әҙер торған изгелекле кешеләр байтаҡ арабыҙҙа.

Үкенескә күрә, Сережа кеүек бәхетһеҙлеккә дусар булыусылар берәү-икәү генә түгел шул. Былтыр 4 йәштән 14 йәшкә тиклемге тиҫтәнән ашыу бала һәр береһе 190 мең һум самаһы торған ошондай прибор менән тәьмин ителгән. Бынан тыш, "Изгелек" мәрхәмәтлек фонды ярҙамы менән 3 йәшлек ҡыҙ баланың йөрәгенә операция эшләтеү өсөн - миллион ярым, 4-5 йәшлек өс ир балаға нейростимулятор һатып алыу өсөн - 1 миллион 100-әр мең, 1-6 йәштәге алты балаға ДЦП-нан дауаланыу өсөн - 188-әр мең, ортопедия ярҙамына мохтаж тиҫтәнән ашыу баланың һәр береһенә 120-шәр мең (шул иҫәптән өсәүһенә - 291 мең 905 һум) аҡса йыйып тапшырылған.

Бындай изге ғәмәлдәр "Изгелек" мәрхәмәтлек фондының "Ашығыс ярҙам" программаһы сиктәрендә бойомға ашырыла. Ул республикабыҙҙа яңы тыуған сабыйҙарҙан алып 25 йәшкә тиклемге ауыр сирле йәштәргә ашығыс дауаланыу талап ителгән осраҡтарҙы күҙҙә тота, сөнки, үкенескә ҡаршы, дәүләтебеҙ ҙә, сереп байыған һәм аҡсаһын ҡайҙа, нимәгә тотонорға белмәй йүңкегән ил олигархтары ла ауыр сирлеләргә ярҙам ҡулы һуҙырға ашығып бармай. Уйлап ҡараһаң, бәләкәй генә эш хаҡынан, пенсияһынан арттырып, хәленән килгән ярҙамды күрһәтеүсе айырым кешеләрҙең дә, изгелек ҡанундарынан тайпылмай йәшәүсе һәм эшләүсе ҡайһы бер ойошма етәкселәренең дә граждандлыҡ позицияһына юғары баһа булып яңғыраны ауыр сирле баланың "Мин бәхетле!" тигән һүҙҙәре. Тимәк, иң ҙур бәхет был донъяла - сәләмәтлек! Сирлеләрҙе ҡыуандырыу, уларға шатлыҡ, бәхет бүләк итеү - иң сауаплы ғәмәлдәрҙең береһе. Бәйғәмбәребеҙ хәҙистәрендә әйтелеүенсә, "Кеше кешегә ярҙам иткән саҡта, Хоҙай уның үҙенә ярҙам итә"; "Изге эш башҡарыуға ярҙам итеүсене, изге эште башҡарыусы кеүек үк, мәрхәмәтлектәр көтә". "Изгелек" мәрхәмәтлек фондының изге ғәмәлдәре бына шундай хәҡиҡәткә таяна. Әйткәндәй, ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән ауыр сирлеләрҙең береһен дә иғтибарынан ситтә ҡалдырмай ул. Фонд тыумыштан сирлеләрҙе (йөрәк, быуын-һөйәк, битяңаҡ патологияһы), шәкәр диабетлы, етлекмәй тыуған сабыйҙарҙы (ретинопатия), эпилепсиянан электр стимуляторы ҡуйҙырыуға, янған тән урындарына пластик хирургияға мохтаждарҙы, онкология (гематология) менән яфаланыусыларҙы үҙ ҡанаты аҫтына ала һәм ярҙам итә. **Ярҙамға мохтаж сирлеләр йә уларҙың ата-әсәләре, яҡындары "Изгелек" мәрхәмәтлек фондына Өфө ҡалаһының Зәйнәб Биишева урамы, 12-се йорт адресы йәки 246-23-68 телефоны буйынса мөрәжәғәт итә ала. Фондтың сайты: www.izgelek.com, e-mail: info@izgelek.com, "Бәйләнештә"ге төркөмө: vk.com/public46351928**

Шуны хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: бәлә килгәндә, һеҙ яңғыҙығыҙ түгел, мәрхәмәтлеләр байҙарҙан күберәк тә, уларҙан юғарыраҡ һәм күпкә байыраҡ та - донъябыҙ таянысы тап ана шундайҙар ҡулында.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СКУТЕРҘА ЕЛГЕҢ КИЛҺӘ...

Урамда елеп үтеп киткән скутерҙар бөгөн бер кемде лә аптыратмай, ләкин хәүефкә һала, сөнки руль артында күпселеген үҫмерҙәр һәм мәктәп уҡыусылары ултыра. Был транспорт төрөндә йөрөү өсөн быға тиклем бер ниндәй документ та талап ителмәне, берҙән-бер талап - руль артында ултырыусының йәше 16-нан да кәм булмаҫҡа тейеш ине. Ләкин был талапҡа күп осраҡта ҡул һелтәп ҡаралды һәм скутер менән, айырыуса ауыл ерендә, 10 йәшлек баланың да идара иткән осраҡтарын күрергә мөмкин ине. Тик оҙаҡламай йәш "водителдәргә" руль артынан төшөргә тура киләсәк, сөнки Дәүләт Думаһы өсөнсө уҡыуҙа скутер, мопед йәки еңел квадроцикл йөрөтөүселәрҙең мотлаҡ рәүештә идара итеү танытмаһы булырға тейешлеге тураһында закон ҡабул итте.

Яңы законға ярашлы, ике тәгәрмәсле тимер аттарҙа елдерергә яратыусылар хәҙер "М" категориялы идара итеү танытмаһы алырға һәм транспорттарын теркәргә тейеш. Закон двигатель күләменә ҡарамайынса, бөтә төр скутерҙарға ла ҡағыла. Идара итеү танытмаһы алыу өсөн имтиханды 16 йәш тулғас тапшырырға мөмкин. Шулай уҡ ҡулында башҡа категориялы идара итеү танытмаһы булған кеше лә скутер, мопед һәм квадроцикл йөрөтөү хоҡуғына эйә.

Шулай уҡ яңы закон трамвай һәм троллейбус менән идара итеүселәр өсөн дә талапты яңыртты һәм яңы төр категориялар индерҙе. Хәҙер "Tm" һәм "Tb" категорияға эйә булыу, йәғни трамвай һәм троллейбус менән идара итеү өсөн кешегә 21 йәш тулыуы мотлаҡ, ә элек ул 18 йәш менән сикләнә ине.

Бынан һуң беҙҙең илдә алынған идара итеү танытмаһы йәки транспорт менән ваҡытлыса идара итеү мөмкинлеге биргән танытмаһы булмаған кешене эшкә алыусы юридик шәхестәргә һәм шәхси эшҡыуарҙарға 50 мең һум күләмендә штраф түләргә тура киләсәк.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# ҺАЛЫМ ХӘЛЕ НИСЕК?

**Мөлкәт һалымы ташламаһын бары тик һатып алынған йәки төҙөлгән йорт өсөн алырға мөмкинме?**

- 2009 йылдың 19 июлендә ҡабул ителгән 202-се һанлы Федераль законға ярашлы, Рәсәй Федерацияһы Һалым кодексының 220-се статьяһына үҙгәрештәр индерелде һәм торлаҡ һатып алыуға йәки төҙөүгә мөлкәт һалымы ташламаһы биргән объекттар исемлеге тулыландырылды. 2010 йылдың 1 ғинуарынан һатып алынған йәки төҙөлгән торлаҡ йорт торған ер биләмәһенә лә мөлкәт һалымы ташламаһы бирелә, йәғни ер биләмәһе һәм унда урынлашҡан торлаҡ йорттар мөлкәт һалымы ташламаһы алған осраҡта бер объект булараҡ ҡабул ителә.

Торлаҡ йорт төҙөү өсөн тәғәйенләнгән ер биләмәһе һатып алған осраҡта, мөлкәт һалым ташламаһы өйгә хосуси милек хоҡуғы биргән таныҡлыҡ алғандан һуң ғына бирелә. 2008 йылдың 1 ғинуарынан өй һатып алыу йәки төҙөү өсөн ташлама күләме 2 миллион һум менән сикләнгән (бында торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн тотонолған маҡсатлы займ (кредит) өсөн түләнгән процентар ташлама суммаһына индерелә).

**Миҫалдар.** Әгәр ҙә 2012 йылда өй, ер биләмәһе менән бергә, 2 млн 500 мең һумға һатып алынһа һәм килешеүҙә өйҙөң хаҡы 1 млн 500 мең һум итеп баһаланһа, кире ҡайтарыласаҡ һалым ташламаһы күләме 2 млн һумдан артмаясаҡ. Әгәр ҙә инде ер биләмәһе һәм өй 2009 йылда һатып алынһа (өйҙөң хаҡы 900 мең һум, ә ер биләмәһенеке - 50 мең булған икән) һәм хоҡуҡ тураһындағы дәүләт теркәүе таныҡлығы 2009 йылда рәсмиләштерелһә, мөлкәт һалым ташламаһы бары тик өй өсөн генә түләнәсәк.

Өй төҙөү өсөн ер биләмәһе 2004 йылда алынды, ти. Өй 2004-2012 йылдарҙа төҙөлә. 2012 йылдың аҙағында торлаҡ йортҡа хоҡуҡ биргән дәүләт теркәүе танытмаһы алына. Өй хужаһы 2013 йылда йәшәү урыны буйынса 3-НДФЛ формаһындағы декларация тапшыра һәм 2012 йылдың килеме буйынса һалынған һалымды кире ҡайтара ала. 2014 йылда, шулай уҡ декларация тапшырғандан һуң, 2013 йылдың килеме буйынса һалымды кире ҡайтарырға мөмкин.

**Төҙөлөп бөтмәгән торлаҡ йортто һатҡан осраҡта һалым ташламаһы күләме күпме буласаҡ?**

- Әгәр ҙә төҙөлөп бөтмәгән йорт шәхси милектә 3 йылдан кәм булғанда һәм уны һатҡан осраҡта, физик шәхес һалым декларацияһы тапшырырға бурыслы. Мөлкәт һалымы ташламаһы был осраҡта 250 мең һум тәшкил итәсәк.

**БР буйынса Федераль Һалым инспекцияһы әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Үлән йыйыу мәле

**Яҙ етеп, үләндәр сығып, ағастар япраҡ яра башлаған мәлдә дарыу үләндәре йыйыу кәрәклеге тураһында уйлана башлайһың. Һәр йондоҙлоҡтоң үҙенең шифалы үләне бар, бөгөн һеҙҙе шулар менән таныштырырға теләйем. Кемдер йондоҙлоҡтарға бик ышанып та етмәйҙер, шулай ҙа хәтер һандығығыҙға һалып ҡуйығыҙ. Йондоҙлоҡтарҙың исемдәрен дә үҙемсә атайым.**

**Уҡсыларға** меңъяпраҡ, дегәнәк, ирәүән, ҡурай үләне (дудник), мүк еләге, кориандр, ҡыҙыл туҡранбаш, шыршы еләгенең сәскәләре һәм емештәре ревматизм, ишиас (радикулит), тын алыу системаһы сирҙәренән дауа булып тора.

**Кәзәмөгөҙҙәргә** шыршы, кипарис, туя, ҡыҙыл сөгөлдөр, әрем, шыршы үләне (баҫыуҙа күп була), шиңмәҫгөл үләндәренең тамыры май биҙҙәре сирен, һынған урындарҙы дауалауҙа отошло.

**Һыуғоярҙарға** ишәкҡолаҡ (окопник), ҡош өрәңгөһе (палуб) үләндәренең япраҡтары менән ҡан тамырҙарының варикоз киңәйеүенән һәм нервы ауырыуҙарынан дауаланыу кәңәш ителә.

**Балыҡтарға** мүк, ҡыяр үләне, йәғни һыу үҫемлектәренең япраҡтары төрлө шештәрҙе, аяҡ табанындағы бәшмәк ауырыуҙарын дауаларға ярҙам итә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## Диабет

❖Бәпембә (япраҡтары) - 25 грамм, ҡара көртмәле (япраҡтары) - 25 грамм, галега (үлән) - 20 грамм. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 5 минут ҡайнатырға, һыуығансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда яртышар стакан эсергә.

❖Ҡара көртмәле (япраҡтары) - 50 грамм, фасоль (ҡуҙаҡтары) - 50 грамм, галега (үлән), бөтнөк (япраҡтары) - 50 грамм. 2 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 0,5 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә ҡабул итергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Ҡаты күҙле кеше була. Күҙе тейгән кеше биҙрә менән һыу алып ҡайтҡанда, артынан килеп, һыуын урлап алалар. Шул һыуҙы эсерәләр, шул һыу менән баланың битен, күҙен йыуалар.*



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Йәш бала ауырыуҙарын имләү

**Бәллүгә бетеү элеү.** Йәш балаға сир килмәһен, уны пәрей алмаштырмаһын тип, ҡағыҙға яҙыу яҙып, күн менән тышлап, бетеү яһап, бәллүгә элеп ҡуйғандар.

**Бишеккә китап ҡуйыу.** Яңы тыуған баланың үҙен генә ҡалдырғанда, бишегенә мендәр аҫтына китап (Ҡөрьән) ҡуя торғайнылар.

## Баланы күҙҙән һаҡлау

**Тәҙрә быуы, ишек бауы име.** Күҙ тейһә, ишек тотҡаларын сайып, тәҙрә быуын һөртөп, баланың битен йыуалар. Был процедураны башҡарған саҡта: "Ҡара күҙҙән, ҡуңыр күҙҙән, зәңгәр күҙҙән", - тип укынырға кәрәк, сөнки доғаһыҙ им-томдоң файҙаһы булмай икән.

**Ыҫлау, төтәҫләү.** Күҙеккән баланы артыш, ҡайын бәшмәге, мәтрүшкә, шулай уҡ күҙ тейгән кешенең берәй һүрендеһен, олторағын яндырып ыҫлау ҙа киң таралған булған.

**Өшкөрөү, эшкәртелгән әйбер име.** Өшкөрөү, өшкөртөлгән тоҙ, һабын, һыу менән йыуыу ҙа баланы күҙ тейеүҙән ҡотҡарған.

## Урта Урал башҡорттарында күҙҙән имләү

**Һыу урлау.** Ҡаты күҙле кеше була. Күҙе тейгән кеше биҙрә менән һыу алып ҡайтҡанда, артынан килеп, һыуын урлап алалар. Шул һыуҙы эсерәләр, шул һыу менән баланың битен, күҙен йыуалар.

**Һыуға күлдәк ағыҙыу.** Күҙ тейеп илаһа, баланың өҫтөнән күлдәген йыртып алып, ауылдан түбән һыуға ағыҙалар, һыу, күлдәк менән күҙ теле лә китә икән.

**Йыуынды бөркәү.** Бала ярһып, ак күбеккә төшөп илаһа, өс тәҙрәнең быуын алып, ишек, таба тотҡаһын йыуып алып, шул һыуҙы бала өҫтөнә бөркәләр.

**Күҙ үләне име.** Күҙ тейгән баланы күҙ үләне, күҙ бесәне менән төтәҫләгәндәр, төтөнөн еҫкәткәндәр. Баланы күҙ үләне төтөнөнә тотҡандар.

**Мунса ташын сайҡау.** Күҙ теле яман була. Балаға тейһә, бала илай ҙа илай. Әбейҙәр ишек, тәҙрә тотҡаларын, мунса мейесенең өс мөйөшөнән өс ташты сайҡап алып, шул һыу менән йыуындырғандар. Йыуындырған һыуҙы сыҡмай ғына ишектән түгергә кәрәк.

**Күҙе тейгән кешенән имләтеү.** "Күҙ тейгәндә күҙе тейгән кешене алып киләләр ине. Күрше ҡатындың күҙе тейгән ине ҡыҙыма. "Алып килең уны", - тине ҡәйнәм. Күршене алып килгәйнеләр, ул: "Тейгән инде күҙем", - тип төкөргән ине, ҡыҙым һиҫкәнеп китте лә, шул арала йоҡлап та китте.

Күҙе тейгән кеше үҙе килмәһә, унының сепрәген, һүрендеһен, кейемен алып киләләр ине. Шуларҙы яндырып, төтөнөн еҫкәтәләр. Бала йоҡлап китә торғайны. Имләгәндә әпсендәр әйтә инеләр:

*Ҡара кешенең ҡара күҙе теймәһен,*
*Ҡоңғор кешенең ҡоңғор күҙе теймәһен.*
*Ай ҡайтһын, көн ҡайтһын,*
*Ошо балаға күҙ тейгән,*
*Һурыҡ-һурыҡ-һурыҡһын! -*
тип өшкәрәләр, төкөрәләр ине.

**Күмер менән имләү.** Күҙ тейгәндә күмер менән дә имләйҙәр. Күмерҙе алып һыҙалар ҙа ошо әпсенде әйтәләр:

*Кемдең күҙе тейгән балаға,*
*Кем уйнатҡан баланы?*
*Ай ҡайтты, көн ҡайтты,*
*Күҙ эйәһе, һин дә ҡайт!*

Аҙаҡ һыҙған күмерҙе һыуға һалалар. Шунан һыуҙы сығарып түгәләр. Бала баҫылып йоҡлап китә икән.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

**(Дауамы бар).**

ЙӘШТӘР ҠОРО

**Художестволы сәнғәттең кешегә, бигерәк тә йәш быуындың рухи донъяһы үҫешенә йоғонтоһон баһалап бөтөп булмайҙыр, әлбиттә. Заманалар ниндәй генә булмаһын, тап сәнғәт йәмғиәттең әхлаҡи ҡиммәттәрен һаҡлап ҡала аласаҡ, тиҙәр, сөнки ул матурлыҡты тойорға, нимә яҡшы, нимә насар икәнен айырырға өйрәтә. Рәсем төшөрөү - ул һәләтме, әллә һөнәрме? Компьютерлаштырылған заманда рәссам һөнәренә мохтажлыҡ кәмемәҫме?**

**Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика художество гимназия-интернаты уҡыусылары Гүзәлиә Ғәйнетдинова, Зөһрә Байегетова, Эльвина Исхаҡова, Хазина Ғибәҙәтова, Айзилә Мөләкова менән әңгәмәбеҙ ошолар һәм уҡыу йортоноң милли сәнғәт үҫешенә индергән өлөшө хаҡында.**

# МАТУРЛЫҠТЫ ТОЙОУ ӨСӨН...

## күңелеңдә матурлыҡ булырға тейеш

➔ **Һүрәт төшөрөү йәмғиәт тормошонда бик уникаль күренеш иҫәпләнә. Унының барлыҡҡа килеүе ризыҡ табыу, йылыныу мохтажлығы менән түгел, ә күңел талабы менән бәйле. Һеҙ был уҡыу йортон ниндәй маҡсат менән һайланығыҙ?**



**Зөһрә:** Художество гимназияһын һайлауым, әлбиттә, күңел талабы ине. Был уҡыу йортонда алтынсы йыл уҡыйым, үҙемде һәр яҡлап, белем йәһәтенән дә, спорт яғынан да үҫтерә алдым. Көндөң тәүге яртыһында, башҡа мәктәптәр кеүек үк, дөйөм белем биреү программаһын үтәбеҙ. Төштән һуң инде ижад менән шөғөлләнәбеҙ. Быйыл мин ун беренсе класта, яңы ғына диплом эштәрен тамамланыҡ, мин үҙем скульптура йүнәлешенә өҫтөнлөк бирҙем. Бәләкәйҙән йылға буйынан ҡайтып инмәй, көндәр буйына шунда балсыҡтан төрлө һындар әүәләй инем. Скульптура мейене шәберәк эшләтә, балсыҡты ҡулға алһаң, эшләге килеп кенә тора, ул мине тынысландыра, бәлки, тәбиғи материал булғанға шулайҙыр. Башҡорт телен яратҡанға күрә, журналист һөнәрен һайларға теләйем.

**Айзилә:** Атай менән әсәй ебәрергә теләмәһә лә, үҙемдең аңлы ҡарарым менән һайланым был уҡыу йортон. Әгәр һин бәләкәйҙән һүрәт төшөрәһең һәм уны төшөргәндә үҙеңде бөтөнләй икенсе донъяла хис итәһең икән, был һәләтте үҫтермәй ҡалыу гонаһ булыр ине. Һис яңылышмаһым, үҙемдең юлымды, маҡсатымды ошо гимназияла билдәләнем, тип уйлайым. Хәҙер инде үҙем дә гимназияға яҡшы һөҙөмтәләр килтерергә тырышам. Быйылғы уҡыу йылында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсында һәм башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадала ҡалала беренсе урын яуланым. Драма түңәрәгендә, гимназияның "Тамыр" студияһы менән бергә алып барған "Портрет" проектында теләп ҡатнашам.

**Хазина:** Бында уҡыуы шул тиклем мауыҡтырғыс. Һәр балала яҡшы уҡырға ынтылыш көслө. Мөхит үҙе үк бына шундай ынтылыш тәрбиәләй. Уҡытыусылар, тәрбиәселәр һәм, әлбиттә, директорыбыҙ Гөлйемеш Хәйрулла ҡыҙы Садыҡова яҡшы педагог та, яҡын дуҫ та, икенсе әсәй ҙә була белә, иң мөһиме, улар беҙҙе ярата, беҙгә яҡшы булһын өсөн бөтөн шарттар тыуҙыра. Ғөмүмән, беҙҙең гимназияла әхлаҡлы балалар уҡый, беҙҙең уҡыусылар башҡалар араһында әҙәпле, тыйнаҡ, етди булыуҙары менән шунда уҡ айырылып тора. Мәҫәлән, ҡала транспортында беҙҙең гимназия малайҙары мотлаҡ ололарға урын бирә.

**Эльвина:** Гимназияның үҙенең генә йолалары ла бар. Мәҫәлән, беҙ йыл һайын урамға сығып, ҡарҙан төрлө скульптуралар яһайбыҙ. Уҡыу йылы тамамланғас, ике аҙнаға Өфөлә ҡалып, төрлө урындарға сығып, һүрәттәр төшөрәбеҙ.

**Гүзәлиә:** Мин алтынсы класҡа тиклем Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында уҡығайным, ниндәй генә дәрестә лә дәфтәрҙәремдең арты һүрәттәр менән тулып бөтә ине. Һүрәт төшөрөргә яратыуым, рәссам булырға тигән балалыҡ хыялы мине был гимназияға алып килде. Хәҙер ун беренсе класҡа еткәс, фекерем бер аҙ үҙгәрҙе, моғайын, киләсәктә мин сит телдәр буйынса белгес булырмын, ә һүрәт төшөрөү ул ғүмерлек шөғөлөм булып ҡаласаҡ.

➔ **Һүрәт төшөрөү сәнғәте тормоштағы матурлыҡты тағы ла нескәрәк тойорға өйрәтәлер, ғөмүмән, һеҙ донъяны икенсе төрлө күреүсе, икенсе төрлө тойоусыларҙыр, шулай бит?**

**Айзилә:** Бер рәссам йәшәгән. Ул бөтә ваҡытын бары тик рәсем төшөрөүгә бағышлаған. Әйләнә-тирәһендәге бар нәмәнең һүрәтен төшөрөп бөткән, башҡа төшөрөрҙәй объект ҡалмағас, бер саҡ урамдағы күләүектең һүрәтен эшләргә тотонған. Ул уны шундай итеп һүрәтләгән, күләүектең матурлығына барыһы ла хайран ҡалған. Ә беҙ күләүектә бары тик күләүек күрәбеҙ... Ысынлап та, тормошта һәр нәмәнең үҙенең матурлығы бар, ә беҙ иң күркәм сәскәләргә һоҡланырға ла ваҡыт тапмайбыҙ, күрмәйбеҙ ҙә. Был гимназияла уҡый башлағандан һуң донъяға бөтөнләй икенсе күҙҙәр менән бағам. Ҡайҙалыр китеп барғанда тәбиғәттең матур бер өлөшөн күреп ҡалһам, фотоға төшөрөп алырға, йәиһә иҫтә ҡалдырырға тырышам.

**Эльвина:** Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе күрмәй. Һүрәт төшөргәндә лә, күңелеңде һалмаһаң, эшең уңышлы барып сыҡмай. Уҡытыусыларыбыҙ ошо хәҡиҡәткә төшөнөргә ярҙам итә лә инде. Унан һуң, ихлас кеше генә үҙен уратып алған донъя менән һоҡланырға һәләтле. Ихласлыҡ булмаһа, бер сәнғәт төрө лә үҙенең серҙәрен һиңә асмаясаҡ.

(Дауамы 11-се биттә).

*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*

# ХӘҘЕР ИҺӘ АЗАТЛЫҠТЫ...

## аҡыл көсө менән даулайыҡ

**"Киске Өфө"нөң сираттағы һанын энәһенән-ебенә тиклем уҡып бөткәс, элеккеләрен дә ҡараштырып, көнүҙәк материалдарҙы яңы тәьҫораттар күҙлегенән үткәреп алдым.**

Шундай мәҡәләләрҙең береһе - "Боронғо була тороп... Йәки ҡаҙаҡтарҙың башҡорттарға аптырағаны тураһында" (2012 йыл, № 32) тип атала. Һәр башҡорттоң йәненә үтеп керә һәм йөрәктә тәрән эҙ ҡалдыра торған был мәҡәләне ҡат-ҡат уҡып сыҡтым һәм унда әйтелгән фекер бар булмышымды биләне: "Ҡаҙағстандағы башҡорттарҙың ныҡлап ассимиляцияға бирелә барыуын, башҡортлоҡтарын онотоуын күреп йөрәк әрней, - ти Ҡаҙағстанда йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең береһе Урал Аҙнабаев. - Бының өсөн берәүҙе лә ғәйепләргә теләмәйем. Барыһына беҙҙең битарафлыҡ ғәйепле. Әйткәндәй, беҙҙең пассивлыҡ ҡаҙаҡтарҙы ла аптырата ул. Улар йыш ҡына:"Ни өсөн шундай боронғо халыҡ була тороп, үҙегеҙҙе башҡаларҙан түбән ҡуяһығыҙ, башҡаларға ҡушымта булып йөрөйһөгөҙ? Ниңә башҡорт ойошмаларын үҙаллы итеп төҙөмәйһегеҙ?"- тип әйтеп-әйтеп китәләр..."

Әлбиттә, милләттең бындай хәлендә уның битарафлығын ғына сәбәпсе итеп ҡуйырға ярамай. Башҡорттарҙың ике йөҙ йыл буйына үҙҙәре генә тиерлек Рәсәй империяһы экспансияһына ҡаршы тороуы, меңәрләгән башҡорттоң ҡорбан ителеүе, йөҙәрләгән башҡорт ауылдарының яндырылып, юҡҡа сығарылыуы, шулай уҡ 1937 йылғы золом афәттәре барыбер ҙә уларҙың ҡанатын арыу ғына ҡайырған, башын баҫып йәшәргә мәжбүр иткән шул. Башҡорт халҡының фажиғәле тарихы тураһында бөгөн үҙебеҙҙән башҡа берәү ҙә белмәй һәм белергә лә теләмәй. Быға үпкәләп булмай, әлбиттә. Әйткәндәй, бер ваҡиға иҫкә төшә. Өфөлә Рәсәй һәм Башҡортостан президенттарының бер осрашыуы ваҡытында Рәсәйҙәге һәм беҙҙәге халыҡтарҙың күп төрлөлөгөнә ишара яһалып, "Башҡортостанда уның мәҙәниәт, дин, телдәр төрлөлөгөндә, халыҡтар дуҫлығында бөтә Рәсәй тамсыла кеүек сағыла", тигән ҡанатлы әйтем пәйҙә булғайны. Был әйтемдең мәғәнәһен төптән аңлаған кеше мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйғандыр, моғайын. Сөнки Рәсәй империяһының күп милләтле булып китеүе уның колониаль баҫып алыу сәйәсәтенә бәйле булһа, Башҡортостанда милләттәр һанының күплегенә ошо колониаль мәхшәрҙә төрлө халыҡ вәкилдәренең башҡорт ерҙәренә күпләп күсенеүе сәбәпсе бит.

Тарихыңды өйрәнергә, белергә кәрәк. Сәмерхан Ҡунафин ҡусты "Киске Өфө"лә үҙенең "Тарих - күҙәтеүсе һәм ул үҙен белмәгәндәрҙе ҡаты язалай" тип исемләнгән мәҡәләһендә: "Рәсәй халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, үҙ тарихын белмәй... Белергә ынтылыш та юҡ кеүек", - тип яҙғайны. Был һүҙҙәр менән килешмәү мөмкин түгел. Иң ҡыҙғаныһы шул: был - ысынбарлыҡ бит. Тормошобоҙҙо, булмышыбыҙҙы ҡуйы томан солғап алған кеүек тойола. Ләкин был "томан"дың барлыҡҡа килеү сәбәбен дә шул уҡ тарихтан беләбеҙ. Рәсәйҙә беренсе император Петр I бына ниндәй васыят ҡалдырған: "...а басурман зело тихим образом, чтоб не узнали, сколько возможно "убавлять". Ниндәй мәкерле васыят әйтеп ҡалдырылған! Ошонан һуң башҡорт халҡының ҡанлы тарихына, уның әҙселектә ҡалыуына аптырарлыҡмы һуң? Ата-бабаларыбыҙҙың ике йөҙ йылдан ашыу ваҡыт азатлыҡ өсөн көрәше мәлендә 600-700 ауыл юҡ ителгән, 30 меңләп башҡорт үлтерелгән, һөргөнгә оҙатылған. Ә бит ошо ике йөҙ йыллыҡ дәүерҙә ул ихтилалдар 15-20 йыл һайын күтәрелеп торған! Ошо үҙе каннибализм түгелме ни? Ғайса бәйғәмбәр "Үҙеңә теләмәгәнде кешегә эшләмә!", "Үҙ уставың менән бүтән кешегә (бүтән халыҡҡа) барма", "Үлтермә, урлашма", тип әйтеп ҡалдырған - бына ҡайҙа ул хәҡиҡәт!

Ҡайһы саҡ башыма: "Нилектән Аллаһу Тәғәлә беҙгә шундай яҙмыш бирҙе икән?" - тигән һорау ҙа инеп сыҡҡылай. Ә төптәнерәк уйлаһаң, ғаләмдәрҙе төҙөүсе Раббыбыҙ үҙенең ерҙәге ҡолдары - кешеләргә ысын мәғәнәһендә Кеше булыр өсөн мәңгелек көрәш бүләк иткән бит, тигән һығымтаға киләһең. Ул да булһа - яҡшылыҡ менән яманлыҡ араһындағы көрәш. Әҙәм затына Аллаһы аң, зиһен, хәтер, уйлау һәләте, һиҙемләү, намыҫ, нәфрәт, йомартлыҡ, ҡомһоҙлоҡ кеүек тик кешегә генә хас сифаттар ҙа биргән. Ҡөрьән Кәримдә әйтелгәнсә, Аллаһу Тәғәлә әҙәм затына бер нәмәне лә бушҡа ғына бирмәгән. Ризыҡты - көс, тир түгеп табырға, азатлыҡты -ҡан ҡойоп, уңыштарҙы - зиһенде эшкә егеп яуларға насип иткән... Кешелек цивилизацияһы ваҡыт ағышында эволюция кисереп, шул уҡ азатлыҡты ҡан түгеп, ҡорал ярҙамында түгел, ә аҡыл көсөн эшкә егеп дауларға тейештер хәҙерге дәүерҙә? Һиндостан халыҡтарының Мохандас Карамчанд Ганди етәкселегендә азатлыҡ яулауы - быға аныҡ миҫал. Бәлки, Аллаһы Тәғәлә башҡорт халҡын да ошондай миссия менән ебәргәндер ергә? Ата-бабалаларыбыҙҙың иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡорбан ителеүе рухи көс сағылышы булырға тейештер, минеңсә. Илаһ биргән тарихи хәтер ҙә беҙгә юҡҡа ғына тәғәйенләнмәгәндер бит...

Бөйөк тә, шанлы ла, данлы ла тарихыбыҙҙы күҙаллаһаҡ, ата-бабаларыбыҙ алдындағы бурыстарыбыҙ бихисап булыуы күренә. Был йәһәттән рәссамдарыбыҙ, һынлы сәнғәт оҫталары алдында күп эштәр тора әле. Әгәр мин скульптор булһам, үҙем төҙөйәсәк мәсет менән бер комплекста ислам диненә хыянат итергә теләмәгәнлектән, терeләй яндырып үлтерелгән Иҫәнбикәбеҙгә монументаль һәйкәл ижад итер инем. Беҙгә килгән ҡунаҡтар, туристар, республикабыҙҙа йәшәгән бөтә халыҡтар ошо ҡот осҡос үткәнебеҙҙе лә белергә тейеш, минеңсә. Ә халҡыбыҙҙың 14 йыл буйы монгол-татарҙарға ҡаршы һуғышы ҡайҙа һынландырылған? Заманында бындай ҡаһарманлыҡты тик башҡорт халҡы ғына атҡарған! Ошо сағыштырғыһыҙ батырлыҡ монументаль скульптуралар комплексына ғына лайыҡлы түгелме ни? Ә Алдар Күсәев батырыбыҙҙың черкес батыры менән алышыуы? 74 меңлек рус ғәскәрендә иң көслө, иң ғәйрәтле батыр - башҡорт кешеһе булып сыға. Ул әле лә шулай. Рәсәйҙең иң көслө кешеһе беҙҙең Эльбрус Ниғмәтуллин Гиннесс китабына теркәлгән.

Милләтебеҙ ер шарындағы иң уникаль халыҡ - азатлығын юғалтһа ла, азатлыҡҡа ынтылышын юғалтмаған. Тимәк, ошо йәһәттән генә лә Гиннестар китабына теркәлергә лайыҡлы беҙҙең башҡорт милләте. Әҙәбиәт өлкәһендәге яҙыусыларыбыҙ, тарихсыларыбыҙ ижады бигерәк тә ҙур маҡтауға лайыҡ. Ошо байлыҡты ҡулланыу рәссамдарға күпме эш горизонттары асыр ине. Шул иҫәптән, монументаль скульптура өлкәһендә... Ләкин рәссамдарыбыҙ, гәзиттә яҙылғандарҙан күренеүенсә, финанс ҡытлығы кисерә икән. Ҡайҙа ғына ҡарама - ошо ҡарт ҡараҫҡы - сәйәсәткә барып төртөләһең. Республикабыҙ, еребеҙ үтә лә бай, халҡыбыҙ үтә лә талантлы, тыйнаҡ, киң күңелле, ҡунаҡсыл. Беҙ, гүйә, гигант үрмәксе ауына эләккәнбеҙ ҙә, ул көпшәле энәһе ярҙамында бөтөн байлығыбыҙҙы һурып ҡына тора.

Йортомдоң тәҙрәһе тимер юлына ҡарай. Күреп торам - көнө-төнө оҙон-оҙон эшелондар нефть, нефть химияһы заводтарына инеп, һимеҙ аждаһа кеүек, еребеҙҙең ҡанын һурып сыға ла, ҡайҙалыр "шыла". Әйткәндәй, ул заводтар ҙа, башҡа ойошмалар ҙа (ит-консерва, һөт-май комбинаттары ла) Мәскәү хужалары ҡулында икән, тип һөйләйҙәр. Ә беҙгә, ысын хужаларға, производствоның бысраҡ ҡалдыҡтары, ағыуланған йылғалар һәм бысраҡ һауа ғына тороп ҡала бара. Шул заводтарҙа эшләүселәргә лә зыянлы производствола эшләгән өсөн эш хаҡын исем өсөн генә түләйҙәр. Бынһын һүҙ араһында ғына яҙам. Яҙмай ҙа булмай бит, эшләгән халыҡты йәлләйем.

Ләкин зарланып ҡына эш сыҡмай. Нимә эшләргә, тигән һорау тыуа. Аңлауымса, бөтәһе лә дингә барып тоташа. Сөнки Аллаһ Рәсүле (с.ғ.с.) Уралтау итәгендәге башҡорттарға ла ислам динен таратыу өсөн үҙенең сәхәбәләрен ебәргән. Ерҙәге бөтә нәмәне лә (Ерҙең үҙен дә) Хаҡ Тәғәлә бар иткән һәм ул: "Беҙ бар нәмәгә лә урын бирҙек" (шул иҫәптән, һәр халыҡҡа ла)", - тигән. Тимәк, әҙәм затын Аллаһ Ергә үҙенең вариҫы итеп ҡуйған. "Урын бирҙек" тигәндәй, был турала бөйөк рус ғалимы Л.Н. Гумилев һәр халыҡтың биләгән ерен "кормящий ландшафт" тигән. Ул бит, белеүебеҙсә, Аллаһ тәғлимәтен яҡшы аңлаған ғалим булған. Тимәк, үҙебеҙгә тәғәйенләнгән урынды, ерҙе күҙ ҡараһылай һаҡларға, ҡәҙерләргә тейешбеҙ. Был бурыс иң тәүҙә башҡорт иңенә ята икәнен онотмайыҡ.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Бына шулай, урау юлдар аша булһа ла, үҙ фекеремде белдерергә тырыштым. Юғиһә, үҙебеҙгә бикләнеп, өндәшмәй-һөйләшмәй, мыштым ғына йәшәп ятҡан көнөбөҙ. Былай йәшәп, беҙҙе кем белһен дә, кем күрһен инде? Туғандар, был ерҙә башҡорт булып йәшәүебеҙҙең мәғәнәһе лә, бәлки, бик ҙурҙыр. Беҙ - бәйғәмбәрле халыҡ. Тимәк, Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнешебеҙ булырға тейеш беҙҙең, шуға өмөт бағлайыҡ.**

**Людвиг ШАБАНОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Эш ваҡытында дөрөҙ ағас һапҡа ултыртылған һәм уның менән ағасты соҡоғандар. Йә дөрөҙҙөң үҙе менән соҡоғандар, йә уның һабына балта төйҙәһе менән һуҡҡандар. Ағаста уйым барлыҡҡа килгәс, уны бағау менән эшкәрткәндәр. Солоҡтоң эсен эшкәртеү өсөн йышҡы ҡулланылған. Ә ҡыуыштың өҫкө өлөшөн йышҡы менән шымартыу ҡыйын булғанлыҡтан, терпе менән таҙартҡандар.

Тейешле дәүмәлдәге (ғәҙәттә, диаметры - 34 сантиметр һәм бейеклеге ике метрға тиклем) ҡыуыш әҙер булғас, унда ике-өс тағарау беркетелгән һәм ауыҙы киңлеге 8 сантиметр булған ағас ҡапҡас менән ябылған.

Июлдең икенсе яртыһынан башҡорттар солоҡтарын ҡарай һәм бал ала башлаған. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙе менән махсус ҡында йөрөтөлгән бысаҡ, үрҙә әйтеп кителгән балта, бал өсөн батман, сыраҡ һәм күҙлек, шулай уҡ кирәм, ағас аяҡ алған. Кирәм ярҙамында ағасҡа менгәс, башҡорт ағас аяҡҡа торған һәм сыраҡ яндырып, балдың күләмен ҡараған. Әгәр бал етерлек күләмдә булһа, ул уны ағастан яһалған балғалаҡ йәки бысаҡ менән ҡырҡып, батманға һалған. Батман иһә ялдан үрелгән арҡатау ярҙамында күтәртелгән. Уның бер осо батманға, икенсе осо ҡортсоноң биленә бәйләнгән. Әгәр бал аҙ булһа, бал алыуҙы һуңыраҡҡа ҡалдырғандар. Солоҡтарҙы ҡарау август урталарында тамамланған. Ҡышҡылыҡҡа, бал ҡорттары һыуыҡта туңып үлмәһен өсөн, солоҡ ауыҙы махсус ҡулайлама - ағас ботаҡтары йәки йүкә аҫтына ҡоро үлән һалынған сырпы менән нығытып ябылған.

Һалҡындарҙан тыш, башҡорттар солоҡтарын айыуҙарҙан да һаҡлаған. Бының өсөн солоҡ олоно билдәле бер бейеклектә йүкә менән уралған. Һөҙөмтәлә олон тайып торған һәм айыу ағасҡа менә алмаған. Солоҡто айыуҙан һаҡлауҙың икенсе ысулы шуға ҡайтып ҡала: билдәле бер бейеклектә ағас олоно осло баштары йәки ботаҡтары аҫҡа ҡарап торған ваҡ ағастар менән уратып бәйләнгән. Айыу ағасҡа менә башлағас, осло ботаҡтар уның юлын бүлгән һәм ул артабан юлын дауам итә алмаған. Шулай уҡ ҡайһы берҙә ағастың уртаһында таҙғаҡ урынлаштырылған.

Урмандарҙа солоҡтарҙың төрлө ерҙә, бер-береһенән бер нисә саҡырым алыҫлыҡта урынлашыуы башҡорттарға уларҙы һаҡлап тороу мөмкинлеген бирмәгән. Һөҙөмтәлә бал урлау осраҡтары ла күҙәтелгән. Был хәл-торош Башҡортостандың ҡайһы бер урындарында шундай ғәҙәт тыуыуға сәбәп булған: солоҡ балын йыйғанда күршеләрҙән йәки туғандарҙан бер нисә кеше шаһит рәүешендә ҡарап, умартасы үҙенең балын ғына йыямы икәнен тикшереп торған.

Урмандарҙы ҡырҡыу башҡорттарҙың солоҡтары кәмеүгә килтергән һәм улар умарталар ултырта башлаған. Документтар раҫлауынса, башҡорттар XVIII быуаттың беренсе сирегендә үк бал ҡорттарын аҫырай башлаһа, умарталыҡ хужалығына улар шунда уҡ күсмәгән. Оҙаҡ ваҡыттар ағастарға урынлаштырылған умарталар солоҡто алмаштырған. XX быуат башында Кама алдында, Ағиҙел йылғаһы буйында башҡорттар ағастарға умарталар бәйләп ҡуйған. Уларҙы махсус сығыр (блок) ярҙамында күтәргәндәр (һүрәт).



✓ *Йәшерен телде белеүселәр - аҡыл эйәләребеҙ булған да инде. Был дошмандан тел йәшереү, йәшерен почта ысулы ла. Ғәжәп бит, бер баланы әкиәт һөйләтергә генә ебәреп тә, күпме мәғлүмәт тапшырып булғандыр.*



**Күренекле шағирә, йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл СИТДИҠОВА көтмәгәндә "Диалог" рубрикаһына өр-яңы тема тәҡдим итеп, уның буйынса тик минең менән әңгәмәләшергә теләк белдерҙе. Рәхмәт заман техникаһына - интернеттағы "Бәйләнештәр" сайтына! Бер нисә көндән әңгәмәбеҙ әҙер ҙә булды. Һөйләшеүҙе, әлбиттә, идея авторы үҙе башланы.**

# Әйберләтә яҙма,

## Халҡыбыҙҙың иң боронғо яҙмалары

**Г. Ситдиҡова:** Яңыраҡ башҡорт Википедияһы өсөн "Яҙма" (письменность) тигән мәҡәлә әҙерләгәндә, "Әйберләтә яҙма" тигән баш аҫтында халҡыбыҙ ҡомартҡыһынан да бер миҫал килтерҙем. Нишләптер, ошоға тиклем әллә ни илтифат ителмәгән икән - мәҡәләне әҙерләмәһәм, бәлки, уйыма ла инмәгән булыр ине: башҡорт яҙмаһы, тип, руна яҙмаларын, гәрәп, латин, кирилл хәрефтәре менән яҙылғандарҙы ғына күҙаллап йөрөгәнмен икән. Ә бит бик борондан, бәлки, әле рунаға тиклем үк ҡулланылған яҙмабыҙ ҙа бөгөнгө көнгә тиклем килеп етә яҙған тиерлек бит.

Бына шул "Әйберләтә яҙма" тигәнгә миҫалды Һәҙиә Дәүләтшинабыҙҙың "Ырғыҙ" романынан алдым. Хәтерегеҙҙәме, романдың төп геройы Айбулат һөйгәне Гөлйөҙөмдән бер һәҙиә ала. Унда егет үҙҙәре һуңғы тапҡыр осрашҡанда ҡыҙ бөркәнгән барсалы яулыҡтан өҙөп алынған ике сәскәне, уға төрөлгән янған шырпыны һәм күгәрсен ҡанатын күрә. Быға ҡушып, суҡлап биҙәлгән исемле, сигелгән янсыҡ. Егет шунда уҡ аңлай- һөйгәне уның менән булған ваҡыттарын өҙөлөп һағына, хәтерләй: ошо күгәрсендәй осоп ҡына барыр ине, ҡанаты юҡ, янып-көйөп, көлкүмергә ҡалып бөткән. Ә янсыҡ - һөйөү билдәһе лә, вәғәҙә лә...

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Һеҙҙең "Әйберләтә яҙма" хаҡында килтергән дәлилдәрегеҙҙе үҙемә ҙур яңылыҡ итеп ҡабул иттем. Фән, ғилем әһелдәре, тарихсылар былдай яҙма менән, бәлки, күптән шөғөлләнәләр, һәр хәлдә, минә ундай хеҙмәттәр осраманы юҡ. Бик кәрәк ине, сөнки ошо күренешкә ҡарап, халҡыбыҙ тарихының күп кенә үҙенсәлекле биттәрен асырға мөмкин булыр ине. Был күренеш хаҡында үҙемсә әлегә шулай фаразлайым.

Беренсенән, әйбер ярҙамында икенсе кешегә мәғлүмәт еткереү, хис-тойғо белдереү ихтыяжы кешелек тарихында һәр төрлө яҙма барлыҡҡа килгәнгә тиклем үк формалашҡандыр, тип уйланыла. Әйтәйек, беҙ кешелек үҫешенең төүге дәүерен кешелектең сабый сағы тип алһаҡ, сабыйға иң тәүҙә алманы йә ҡурсаҡты күрһәтеп, уның формаһын, еҫен, тәмен аңлатҡандан һуң ғына уның нисек аталыуын мейеһенә һеңдерә алабыҙ. Тап шуның кеүек, әйберләтә яҙыу нostратик дәүерҙә, телдәрҙән дә, халыҡтарҙан да алдараҡ барлыҡҡа килгәндер, тием. Был йола ниндәйҙер кимәлдә беҙҙә һаҡлана килә икән - был, һис шикһеҙ, милләтебеҙҙең боронғолоғона дәлил.

Икенсенән, әгәр ҙә был яҙыу формаһы урта быуаттарҙа йәки унан да һуңғараҡ барлыҡҡа килгән тип иҫәпләһәк, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙар кейеменең иң төүге тәғәйенләнеше һымаҡ, әйберләтә яҙыуҙың да ихтыяжы иң беренсе нәүбәттә хәрби маҡсатта булғандыр тип уйланыла. Әйтәйек, Америка индейҙары хаҡындағы бер фильмда күрше ҡәбиләнән икенсе ҡәбиләгә ярҙам һорап күмер киҫәге, һыңған уҡ һәм ҡаурый ебәрәләр. Үҙебеҙсә аңлаһаҡ, бында шундай мәғлүмәт булырға тейеш: "Беҙ еңелдек, ҡыуыштарыбыҙҙы яндырҙылар, көлкүмергә ҡалдыҡ, атыр уғыбыҙ юҡ, яугирҙарыбыҙ һәләк булды, мөмкин булһа, ҡош кеүек осоп килеп, беҙгә ярҙам итегеҙ..." Тимәк, бында әйберләтә яҙманы ебәреүсенең хат яҙып ултырырға ваҡыты булмаған, икенсенән, ҡәбиләләр төрлө телдә һөйләшһә, хатты тәржемә итеү кәрәкмәй, өсөнсөнән, быныһы, бәлки, иң мөһимелер - был яҙыу формаһы хәрби серҙе йәшереү маҡсатынан сығып атҡарылған.

**Г. Ситдиҡова:** Боронғо йырҙарыбыҙҙа ла бит әйберләтә символ булараҡ, кинәйә ярылып ята. Быларҙы хәтерҙә тотор, аңлар өсөн әҙерлек тә, зирәклек тә кәрәк шул. Хәтерегеҙҙәме, бер ҡарттың улына нисек кәләш эҙләгәне? Үҙе лә зирәк, ҡыҙ ҙа зирәк, етмәһә, ҡыйыу ҙа - уйлағанын "төрөп һалып" ҡына тоттора ла ҡуя: "Аттар ябыҡ сағында икешәр-өсәр бүрәнә һалып ташыны, һимергәс - берәрҙе генә, ҡайны саҡ уныһы ла төшөп ҡала башланы",- тип яуаплай ул ас килеш ҡоймаҡҡа ташланған ҡунаҡтарына. Ә һорау йорт бүрәнәләренә ҡағылышлы була. Бындай зирәклек халҡыбыҙҙа бик юғары баһаланған да, ҡулланылған да. Шуға бит кинәйә лә, төрттөрөү ҙә һаман осрай милли тәрбиә менән үҫкән быуында.

Милли биҙәк-нағыштар - шулай уҡ яҙма бит. Ҡатын-ҡыҙ кейеме уның паспорты булған ише. Ҡатын-ҡыҙ кейеме ырыуын, араһын, атаһының йә иренең дәрәжәһен, кейәүҙәме-юҡмы, нисә балаһы бар, уларҙың нисәүһе ҡыҙ ҙа, нисәүһе малай икәнен әйтеп торған.

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** "Милли идеяға торош" рубрикаһында башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен һәм әйтемдәрен үҙемсә аңларға тырышып, мәҡәләләр яҙа торғас, уларға һалынған тарихтың, кинәйәнең, образлылыҡтың ҙурлығына, киңлегенә, күркәмлегенә шаһит булып таң ҡалдым. Бәҡтиһән, шул бер нисә генә ярым аңлайышлы һүҙ теҙмәләренән торған мәҡәл-әйтемдәрҙә халҡыбыҙҙың бар тарихы, көнитмеше, фәлсәфәһе, уй-кисерештәре, бәхетле һәм фажиғәле мәлдәре, менталитеты һәм психологияһы һ.б. ята икән. Башҡа төрлө бер сәнғәт тә, мәҙәниәт тә һүҙ сәнғәте кеүек шундайын мөһабәт һәм илаһи була алмай икән. Тағы ла шуныһы ғәжәп: уларҙың һәр ҡайһыһы кешелектең, айырым милләттең төрлө үҫеш һәм һаҡланыу тенденцияларын билдәләрлек әһәмиәткә эйә, икенсе төрлө әйтһәк, милли идея булырлыҡ.

Милләтебеҙҙең тарихы тулы кимәлдә яҙылмаған әле, уның философияһы ла унда-бында, урыҡ-һурыҡ ҡына кимәлдә өйрәнелгән. Был йәһәттән мин шуны ғына әйтә алам: ошо мәҡәл-әйтемдәр эсенә йәшерелгән мәғәнәне тағатыу ғына ла шул хеҙмәттең ҙур өлөшө булырлыҡ.

Бер генә мәҡәл килтерәм: "Ата-әсәйеңдең ҡәбере убала булһын". Был мәҡәлдә кешенең йәшәү программаһын, ғүмер мәғәнәһен тәшкил итерлек фекер бар. Ни өсөн бында фәҡәт ата-әсәйеңдә убаға күмеү маҡсат итеп ҡуйыла һуң? Тағы бер һорау: ә убаға кемдәр күмелә һуң? Батырҙар, хандар, халыҡ араһында абруйлы ныҡ таралған кешеләр. Тимәк, кеше үҙенең ата-әсәһен шул тиклем итеп ҡәҙерләргә, күтәрергә тейеш, улар баҡыйлыҡҡа күскәндән һуң урындары ла убала булырға тейеш. Икенсенән, һин үҙең дә ата-әсәңә, халҡыңа шундай итеп хеҙмәт итергә, йәнеңде фиҙа ҡылырға тейешһең, башҡалар шундай һине тыуҙырған һәм тәрбиәләгән ата-әсәйеңде убаға хөрмәтләп ҡуйырға тейештәр.



*Бына шул "Әйберләтә яҙма" тигәнгә миҫалды Һәҙиә Дәүләтшинабыҙҙың "Ырғыҙ" романынан алдым. Хәтерегеҙҙәме, романдың төп геройы Айбулат һөйгәне Гөлйөҙөмдән бер һәҙиә ала. Унда егет үҙҙәре һуңғы тапҡыр осрашҡанда ҡыҙ бөркәнгән барсалы яулыҡтан өҙөп алынған ике сәскәне, уға төрөлгән янған шырпыны һәм күгәрсен ҡанатын күрә. Быға ҡушып, суҡлап биҙәлгән исемле, сигелгән янсыҡ. Егет шунда уҡ аңлай- һөйгәне уның менән булған ваҡыттарын өҙөлөп һағына, хәтерләй: ошо күгәрсендәй осоп ҡына барыр ине, ҡанаты юҡ, янып-көйөп, көл-күмергә ҡалып бөткән. Ә янсыҡ - һөйөү билдәһе лә, вәғәҙә лә...*

**Г. Ситдиҡова:** Эйе, Әхмәр, әйтем-мәҡәлдәр - беҙҙең бик боронғо ҡанунынамәбеҙ ҙә, шиғриәтебеҙ, әҙәбиәтебеҙ ҙә! Мәҡәл белгән кешегә мең һөйләп, таҡылдап тороуҙың кәрәге юҡ - ҡыҫҡа ғына шул бер-ике һөйләм менән бөтәһен дә әйтәһең дә бирәһең. Бында халыҡ аҡылының ҡаймағы, ҡуйырығы, тосо! Бер үк әйтем-мәҡәл үҙенең кинәйәлелеге менән үтә лә универсаль - бик күп күренештәргә тәңгәл генә ултыра ла ҡуя. Шуға ла халыҡта "Күп һүҙ - суп һүҙ" тигән мәҡәл яралғандыр ҙа.

Әйтем-мәҡәлдәр, йомаҡтар, әкиәттәр - уларҙа ята беҙҙең кинәйә лә, йәшерен тел дә. Был йәшерен телде халҡыбыҙҙа "ҡош теле" тип атағандар. Әкиәттәрҙә, ҡош телен дә аңлаған, тигән һүҙбәйләнеш тә осрай. Был ошо йәшерен телде лә аңлатҡандыр, моғайын. Беҙҙең өйҙән-өйгә ҡуна йөрөп әкиәт һөйләгән инәйҙәребеҙ ошо ҡош телен өйрәтеүсе булған дабаһа. Ә беҙ йыш ҡына әкиәттең сюжетына ғына иғтибар итәбеҙ. Уға ҡош теле тип тә ҡараһаҡ, әллә күпме асыштар яһайһы алда әле!

Йәшерен телде белеүселәр - аҡыл эйәләребеҙ булған да инде. Был дошмандан тел йәшереү, йәшерен почта ысулы ла. Ғәжәп бит, бер баланы әкиәт һөйләтергә генә ебәреп тә, күпме мәғлүмәт тапшырып булғандыр.

Хәтерләйһеңме "Фәтхи һалдат" тигән хикәйәне? Һөйгән ҡыҙы әсиргә төшкән егетенә бығауҙы асыу серен йыр аша өйрәтә! Ҡыҙҙың бар йырҙарын да яттан белгән егет уны һүҙҙәргә иғтибар итә һәм бығауҙы асып, ҡасып китә! Был да беҙҙең "ҡош теле"н ҡулланыуыбыҙҙың бер миҫалы бит. Тотош бер мәктәп ошоғаса иғтибарҙан ситтә ҡала килгән... Бәлки, хәйләләр ҙә...

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Мәгәр "Ҡош теле" тигәндә беҙҙә "бәләкәй генә хат" тигән аңлау бар бит. Ә уның башҡа мәғәнәһе лә бар икән. Хатты тапшырыусы кеше "Бына һиңә шул-шул кеше ҡош телендәй генә хат ебәрҙе", тип әйткән ваҡытта, хатты ҡабул итеүсе шуны аңларға тейеш булғандыр, әйтәйек: "Хатта яҙылғанды тура мәғәнәһендә аңлама, уның кинәйәһенә иғтибар ит, йәғни, был хат беҙгә тура мәғәнәһендә аңлашылмаған ҡош телендә".

**Г. Ситдиҡова:** Мәгәр әйберләтә хат мәҡәлдәрҙән дә боронғораҡтыр, сөнки ғалимдар әйтеүенсә, тел үҙгәреүгә бирелеүсән, бер үк халыҡ төрлө осорҙа төрлө телдә һөйләшкән булыуы бик ихтимал. Башҡорт теле менән дә шулай. Менәр йылдар элек ата-баба ни телдә һөйләшкәндер, әммә бит америка индейҙәре менән Гөлйөҙөм хаты бер үк символдар менән һөйләй! Һәм бер үк мәғәнә лә бирә түгелме? Беҙҙең йөҙ оҡшашлығы хаҡында, хатта көйҙәр оҡшашлығы тураһында уҡығаным бар. Ә бәлки, беҙгә үҙебеҙҙекен уларҙың әйберләтә яҙмаһы менән сағыштырырға кәрәктер? Аҙаҡ инде шул әйберләтә код - йәшерен тел - һүҙҙәр рәүешендә ауыҙ-тел ижадына ла инеп киткән.

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Телебеҙҙең һәм ундағы үҙенсәлекле өндәребеҙҙең боронғолоғона килгәндә, мин шулайыраҡ уйлайым. Тәүбабаларыбыҙ ниндәй генә телдә һөйләшеүенә ҡарамаҫтан, уларҙың телендә үҙенсәлекле өндәребеҙ һәм тамыр һүҙҙәребеҙ булғандыр, тим. Аҙаҡ телебеҙ ҡыпсаҡлашһа ла, төркиләшһә лә, фарсылашһа ла, шул өндәребеҙ һәм тамыр һүҙҙәребеҙ телдән-телгә күсеп йөрөгәндер, тием. Күсеп кенә йөрөмәгән, ә беҙҙең телдең үҙенсәлеген һаҡлаусы төп сифаттар булып та хеҙмәт иткәндер.

**Г. Ситдиҡова:** Телдән тыш, һис шикһеҙ, үҙебеҙҙе айырып торған әйберләтә хат - символика ла бар. Былар иҫәбенә кейемебеҙ, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, бәпес бүләктәре, туй бүләктәре, ҡунаҡ күстәнәстәре, ҡыҙ бирнәһе, ағас һауыттарыбыҙ, малсылыҡ монаяттары ла (бигерәк тә, йылҡысылыҡта), йәғни, көнкүреш кәрәк-ярағы, аш-һыуыбыҙ һ.б. инә.

Бына олатайымдың өйрәк башлы эйәре. Ҡыҙыҡ, улар ҡаҙаҡтарҙа ла бар... Тимәк, "ҡош теле" беҙҙең туғанлыҡҡа ишара яһай. Элек бит һәр нәмәгә сакраль бер мәғәнә һалынған, былай ғына, матур, оҡшаны тип эшләп ҡуйылмаған. Әле һүҙ әйтеп өлгөрмәҫ борон юлда осраған кешеләргә кейемебеҙ, эйәребеҙ ниндәй милләт икәнде аңлатып торған. Төркиҙәрҙә кейемдәр ҙә оҡшаш бит. Ә бына кейемдәге ҡыйыҡ яғабыҙ - монголдар менән туғанлыҡҡа ишаралай. Өйрәк башлы эйәр иһә - исламға тиклемге эйәр булғандыр ...

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Өйрәк башлы эйәрҙе беҙҙә ниңәлер "һырлы эйәр" тип атағандар. Бындай эйәр яуға сапҡан эйәрҙән ныҡ айырыла. Уның менән байрамдарҙа йөрөр булғандар. Дөрөҫ әйтәһегеҙ, был "ҡош теле"нең бер символы. Әйтәйек, өйрәк башлы эйәр һалған башҡорт ҡаҙаҡтарға китеп бара икән, ул был юлы барымтаға йә ҡарымтаға түгел, әйтәйек, кәләш әйттерергә, йәғни изге ниәт менән сәфәр ҡыла. Уның ниндәй эйәр һалып килгәнен күреп, ҡаҙаҡтар ҙа ҡындарынан ҡылысын һурмағандыр, килеүсене яҡты йөҙ менән ҡаршыларға тырышҡандыр. Мин бындай эйәрҙең символикаһын ошо рәүешле күҙ алдына баҫтырам.

**Г. Ситдиҡова:** Ислам ҡабул иткәндән һуң "өйрәкбаш" урыныңа "һырлы" тип йөрөтә башлағандарҙыр, тип уйланыла, сөнки йән эйәһен һынландырырға яра-

**✓ Ә беҙ, тарихи рәүештә ҡылысты төп һуғыш ҡоралдарының береһе итеп һанаған, баһалаған халыҡ, шул спортҡа, ҡылыс алышына үҙебеҙҙән һүҙ таба алмайбыҙ. Ирәмәлләү - ул фехтование!**

# КОШ ТЕЛЕ...

## тураһында һүҙ башлау

маған бит. Унан, эйәр-өпсөн, кейем юлда һәләк булғандарҙы таныу өсөн паспорт ролен дә үтәгән. Ниндәй маҡсат, ниндәй ырыу, ниндәй дәрәжә - тотош күренеп торған. Йәғни, әлеге лә баяғы әйберләтә яҙма килә лә сыға. Был осраҡта инде күрше халыҡтар был телде аңлаған...

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Эйәр-өпсөн, кейем юлда һәләк булыусыларҙы таныр өсөн кәрәк булған, тигән фекерегеҙ менән тулыһынса килешәм. Был - әйберләтә яҙманың төрлө формалары булыуы хаҡында ла һөйләй бит. Рәмил Ҡолдәүләттең "Билбау", "Ҡорама" тигән шиғырҙары, Рәйес Түләктең "Ҡашмау" поэмаһы был йәһәттән үрнәктәрҙең дә үрнәге булырлыҡ.

*Һинән бары билбау ҡалған,*
*Күлдәгеңдең билбауы.*
*Шул билбауҙы һыйпай-һыйпай,*
*Үкһеп-үкһеп илауым,*

ти Рәмил "Билбау"ҙа. "Ҡорама"ла ул үҙенең күңелен төрлө төҫтәрҙән һәм өлөштәрҙән ҡоршалған ҡорамаға сағыштыра. Рәйес инде үҙенең "Ҡашмау"ында ҡашмауға тағылған һәр бер тәңкәгә, унын ҡасан, кем тарафынан һуғылыуына ҡарап, халҡыбыҙҙың шул осорҙағы тарихын тасуирлай.

*Иҫерек ил Башҡортостанымды*
*Ҡашмау итеп тағып бейене,-*

тигән юлдары инде был поэманың кульминация юлдарына әүерелә.

Быңдай юлдарҙы был ике шағирҙың да, башҡаларҙың да ижадынан бик күп килтерергә булыр ине. Ҡыҫҡаһы, нимә генә хаҡында һөйләшә башлаһаҡ та, һеҙҙең һүҙ башындағы "Әйберләтә яҙыу"ға килә лә сығабыҙ. Ни өсөн икән?

**Г. Ситдиҡова:** Әхмәр туғаным, бар Ғаләм бит - әйберләтә яҙыу. Шул яҙманы яйлап асабыҙ. Аллаһы Тәғәлә донъяны башта әйберләтә яралтҡан да, шунан ҡулдарыбыҙға кешелек өсөн ошо серҙәр яҙылған Изге яҙмалар тоттorған. Ҡөрьәнебеҙ эсенә лә әллә күпме кинәйә, ҡатлы-ҡатлы мәғлүмәт һалынған - шуларҙы ла яйлап ҡына аса киләбеҙ.

Беҙҙең ҡылыҡтарыбыҙ, эшләгән игелектәрбеҙ ҙә - яҙма бит ул, рухи яҙма!

Бына әле Бөйөк Ватан һуғышында, Берлинды яулағас, ҡурҡышынан йөрәге ярылырҙай булып ултырған немец ҡыҙ балаһы янына килеп, саф немец телендә алсаҡ һөйләшеп киткән милләттәшебеҙ Бәхтиәр Ғәбделәхәт улы Әбделғужин хаҡында уҡып, ҡәлебемә бер саф нур инеп тулды. Хәйер, был хаҡтағы мәҡәләм һеҙҙең гәзиттең быйылғы 12-се һанында ("Халҡымдың бөйөклөгөн ошо һалдат ҡылғаны менән үлсәр инем...") баҫылды. Унда яҙғандарыма өҫтәп, шуны ғына әйтеп үтәм: ҡото осҡан ғаилә менән асылып китеп һөйләшеп, уларҙы яҡларлыҡ ҡағыҙ ҡалдырып, өс кенә көн булып киткән башҡорт егетенең игелеген ғүмере буйы онотмаған был немец ҡатын-ҡыҙы. Был хаҡта беҙҙең матбуғатта бер һүҙ ҙә булғаны юҡ ине. Ә бит 2010 йылда уҡ уны теге немец ҡатынына табышып биргәндәр. Шунда һалдаттың фотоһы ла бирелгән - был инде әйберләтә яҙма. Өс йыл дауамында һуғыш фажиғәләрен күрә-күрә ҡан кисеп йөрөгән һалдат йөҙө - ә бит бер генә вәхши һыҙат юҡ, йөҙө асыҡ, алсаҡ, күҙҙәре генә бер аҙ һынап ҡарай. Аҡыллы күҙҙәр. Эске матурлығы ла, тышҡы матурлығы ла ҡушылған - бына бит, башҡорттоң аҫылы! Ҡыйыу ҙа, йән аямай һуғыша ла, шул уҡ ваҡытта күңелендә иҫ китмәле мәрхәмәт! Беҙҙең халыҡҡа хас сифаттар был! Был да яҙма! Кешелек донъяһына яҙылып ҡалған бер игелекле яҙма, айырым алғанда, башҡортобоҙ тарихына яҙылып ҡалыр рухи яҙма!

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Әйберләтә хатта булһынмы, "ҡош теле"ндәме, төп урынды кинәйә, ишара, образлылыҡ алып тора. Кинәйәнең, ишараның, образлылыҡтың туранан-тура ҡулланылған жанры - юмор. Хәҙерге заманда башҡорт юморы бармы икән ул? Халыҡ булғас, унын юморы ла бар инде. Тик бына ниндәй юмор тамашасыға башҡорт юморы итеп тәҡдим ителә һәм үҫтерелә һуң?

Бынаһы инде бөтөнләй башҡа төрлө мәсьәлә кеүек тойолһа ла, беҙ барыбер ҙә, Гүзәл ханым, һүҙ башындағы кинәйә, ишара, образлылыҡ мәсьәләһенә кире әйләнеп ҡайтабыҙ. Ни өсөн тигәндә, башҡорт юморын башҡа халыҡ юморҙарынан айырған төп һыҙат, үҙенсәлек тап шул кинәйәгә, ишараға, образлылыҡҡа ҡайтып ҡалалыр ҙа. Ә бына был төшөнсәләр булмаһа йә түбән кимәлдә булһа, тамашасыны көлдөрөү үҙмаҡсатҡа әүерелә һәм көлдөрөүсе үҙе лә һиҙмәҫтән билдән аҫ яҡҡа төшә лә китә. Билдән аҫ яҡҡа төшөү - талантһыҙлыҡты иҫбатлаусы күренеш. Шул уҡ ваҡытта филармония сәхнәһендә ирҙәрҙең - ҡатын ҡыҙ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ир булып кейенеп "прошу не мыҫҡылить" тип йөрөүе лә башҡорт юморы түгел. Хәҙер һеҙгә һорау: ә нисек була һуң ысын мәғәнәһендәге башҡорт юморы?

**Г. Ситдиҡова:** КВН-ды башҡортса атарға ла була . Мәҫәлән - ШУҠтар. Шаян, Уҫал, Ҡыйыу. Уҫал шаянлыҡ та кәрәк ул тормошта. Әлбиттә, һын ҡатып көләрлөк итеп әйтер өсөн туған телде генә түгел, халыҡтың булмышын, асылын да белергә кәрәк. Бар бик нескә шаяртыу - был бик аҡыллы кешеләргә генә хас һәм уны үҙе кимәлендәге кешеләр генә аңлай. Шулай уҡ тупаҫ юмор, тупаҫ шаяртыу, тәләкә бар. Бынаһы ана шул билдән түбән төшөп тә китә.

Таһир Ишкинин интернетта "Шаянуйын" хаҡында бик кәрәкле мәсьәләне күтәреп сыҡҡан. Әлбиттә, йәштәрҙең әле бик юғары кимәлдә сығыш яһай алмауы уларҙың ғәйебенән бигерәк - бәләһе. Киңерәк алһаҡ - бармы һуң бөгөн башҡорт юморы? Ҡайҙа юмористик әҫәрҙәр? Ҡайҙа сатира? Гәзит-журналдарҙы алайыҡ - теле бит урыҫсанан туралай һуҡтырылған, хатта автор башҡортса яҙғанда ла тәржемә һымаҡ итеп яҙа! Аҙаҡҡы биттәрҙәге генә көләмәстәр мәсьәләне хәл итмәй. Ҡайһы мәҡәләне алһаң да (рәсми бойороҡ-указдарҙан тыш) теле халыҡсан, кинәйәтәләкәле булырға тейеш ул. Шунда инде уларҙы уҡырға атлығып торорҙар. Юҡһа, йә ауыл клубындағы докладты, йә хатта некрологты хәтерләткән мәҡәләләр күңелде ҡайтара. Берәйһе тураһында фәрештә һымаҡ һүрәтләнгән мәҡәләне уҡый башлайһың да, балы тешкә тейә... Әллә үлгәнме икән был бахыр, тип уйлап та еппәрәһең хатта.



**Әле күпме генә ваҡыт үткән, хатта Салауаттың үҙ ҡулы менән яҙған фармандарын, хаттарын ҡапыл ғына аңларлыҡ, төшөнөрлөк түгел. Нимә генә тимә, беҙҙең эраға тиклем үк V быуатта беҙҙең атай-олатайҙарҙың ошо ерҙә йәшәгәне билдәле. Уға тиклем үк әллә ниндәй тарих булғандыр, уныһын бер Хоҙай ғына белә. Барлыҡ бәлә үҙ тарихыбыҙҙы йүнләп белмәүҙән килә шул. Рәшит ағай Шәкүр халҡыбыҙҙың йөҙҙән ашыу ырыуы барлығын һанап сығарҙы. Ырыуҙарҙың күп булыуы ла юҡтан ғына түгел, бының менән халҡыбыҙҙың эске ҡан яңыртыу потенциалы тәьмин ителгән. Юҡҡа ғына урыҫса "народ" һүҙенең нигеҙендә "род" тамыры ятмай.**

Бынаһы һис шикһеҙ шулай. Ҡурайыбыҙ, көйөбөҙ беҙҙе милләт итеп танытҡан ише, башҡалар араһында үҙебеҙҙе бер-беребеҙгә танытып торған ҡылыҡфиғелебеҙ, минлегебеҙ, үҙенсәлектәребеҙ ҙә бар. Улар бына ошо үҙ "ҡош телебеҙҙе" аңлау менән дә һалына, йәғни, телдең күренеп торған һәм боҙтау шикелле һыу аҫтында ҡалып йәшеренгән өлөшө лә бар. Беҙ ана шул һыу өҫтөндә ҡалғаны менән генә мөрхәтһенәбеҙ йыш ҡына. Түбәнге ҡатламдарын да өйрәнер ваҡыттар еткәндер. Доньялағы бар һүҙҙәрҙе башҡорт теленә килтереп теркәү йылмайыу тыуҙырһа ла, беҙҙең бына ошо "ҡош теле" аша донъялағы күп халыҡтар менән уртаҡ тамыр барлығы ла асыласаҡ. Ҡолаҡҡа яңғыраған һүҙҙәр түгел, ә унын эсенә йәшеренгән кинәйә, символдар - бына ҡайҙа ята тамырҙар берлеге. Һүҙҙең - һөйәге, һөйәге эсендә елеге бар, ти бит халыҡ.

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Һеҙгә йылмайыу тыуҙырғандай булып тойолһа ла, мәҫәлән, "Ирәмәл" атамаһының шундай этимологик аңлатмалары билдәле: әйтәйек, был һүҙ "ир"ҙән һәм "әмәл"дән тора, тигән аңлатма. Йә булмаһа, алыҫтан ҡарағанда Ирәмәл һырттары ҡатын-ҡыҙҙың түше кеүек, шуға ла ул "ер әмәсе" тип тә аңлатыла, һ.б. Ә бына "ҡош теле" принцибы буйынса, һеҙ был һүҙҙе нисек аңлатыр инегеҙ?

**Г. Ситдиҡова:** "Ирәмәл" атамаһының килеп сығышын төрлөсә фаразлайҙар, ә бит "Урал батыр" эпосында ап-асыҡ әйтелгән

*Иҙел баҫып торған тау,*
*Ирәмәлләп сапҡан тау,*
*Йылға сығып аҡҡан тау -*
*"Ирәмәл" булып ҡалған, ти.*

Ирәмәлләү һүҙе, ғөмүмән, телебеҙҙән бөтөнләй төшөп ҡалған. Ә бит был ҡылыс уйнатыуҙы аңлата, йәғни фехтование тигәнгә лә тап килә. Ә беҙ, тарихи рәүештә ҡылысты төп һуғыш ҡоралдарының береһе итеп һанаған, баһалаған халыҡ, шул спортҡа, ҡылыс алышына үҙебеҙҙән һүҙ таба алмайбыҙ. Ирәмәлләү - ул фехтование!

Минең ҡарамаҡҡа, Ирәмәл ул ир-аттың ҡылыс сабышҡа өйрәнә, ирәмәлләй торған урыны булғандыр, ул бит йәшерен юлдары, майҙандары булған, менеүе лә ауыр тау. Шунда яугирҙәрҙең яу серҙәренә өйрәнеп ятыуы бик мөмкин. Шуның өсөн, тауҙың бер тылсым көсө лә бар, тип кешене алдан иҫкәрткәндә, имеш, ҡара уйлы кеше килһә, тау ебәрмәй, тигәнгә ишаралағандарҙыр. Бәлки, шул рәүешле һынап ҡарауҙар ҙа булғандыр, тәбиғәттең бер иҫкәртеүе тип ҡабул иткәндәрҙер быны.

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** "Ирәмәлләү"ҙе фехтование тип атарға тулы нигеҙ бар кеүек тә, әммә бында бер "әммә" килеп тыуа. "Әмәл" менән "ғәмәл" бер үк тамырҙан сыҡҡан һүҙҙәрме икән? Әгәр ҙә шулай була ҡалһа, Ирәмәл атамаһы башҡорттар ислам динен ҡабул иткәндән, йәғни беҙҙең тел-лөғәткә ғәрәп һүҙҙәре килеп ингәндән һуң ғына барлыҡҡа килгән булып сыға. Миңә ҡалһа, Ирәмәл атамаһы тағы ла боронғораҡ булырға тейеш.

**Г. Ситдиҡова:** Ирәмәл, минеңсә, бер нисек тә "ир" һәм "ғәмәл" һүҙҙәренең ҡушымтаһы түгел, ә бер бөтөн һүҙ - ирәмәлләүҙән сыҡҡан. Тоҫмаллау кеүек форма. Ислам дине менән бәйләү ҙә дөрөҫ булмаҫтыр. Атама, минеңсә, ғәрәп теле йоғонтоһона тиклем үк булғандыр һәм тап бына ошо яугирҙәр әҙерләү, ҡылыс сабыш-ирәмәлләү урыны булғандыр. Әҙер яуап булған килеш, этимологияны әллә ҡайҙарҙан эҙләүҙәргә аптырайым. "Урал батыр" эпосына ла ышанмаҫҡа әллә...

**Ә.Ғ.-Үтәбай:** Килешәм. Был һүҙгә аңлатманы хәҙерге телебеҙҙән табырға тырышыу Салауат Юлаевты "Башҡортостан" гәзите стилендә фарман яҙырға мәжбүр иткән һымаҡ килеп сыға. Әле күпме генә ваҡыт үткән, хатта Салауаттың үҙ ҡулы менән яҙған фармандарын, хаттарын ҡапыл ғына аңларлыҡ, төшөнөрлөк түгел. Нимә генә тимә, беҙҙең эраға тиклем үк V быуатта беҙҙең атай-олатайҙарҙың ошо ерҙә йәшәгәне билдәле. Уға тиклем үк әллә ниндәй тарих булғандыр, уныһын бер Хоҙай ғына белә. Барлыҡ бәлә үҙ тарихыбыҙҙы йүнләп белмәүҙән килә шул. Рәшит ағай Шәкүр халҡыбыҙҙың йөҙҙән ашыу ырыуы барлығын һанап сығарҙы. Ырыуҙарҙың күп булыуы ла юҡтан ғына түгел, бының менән халҡыбыҙҙың эске ҡан яңыртыу потенциалы тәьмин ителгән. Юҡҡа ғына урыҫса "народ" һүҙенең нигеҙендә "род" тамыры ятмай.

**Г. Ситдиҡова:** Тап шулай. Анау тиклем ерҙәр, анау тиклем ырыуҙар - ғәскәрһеҙ буламы ни? Һис шикһеҙ, даими ғәскәре лә булғандыр. Ғәскәр тотор урындар ҙа булғандыр. Тау баштарында ут ҡабыҙып, хәүеф килгәнде иҫкәртеп тороусылар ҙа хәрбиҙәрҙән булғандыр, тим, сөнки ярҙам килгәнсе яу башланһа, сиктән ебәрмәй ҡаршы торор көс булырға тейеш бит. Бәлки, бына шул, бөгөнгөсә әйткәндә, хәрби мәктәптәр, полигондар тау баштарында урынлашҡандыр ҙа...

Ирәндек атамаһы ла Ирәмәл мәғәнәһендә булыуы ихтимал. Шул уҡ ғәскәр мәктәбе, ғәскәр өйрәткән урын. Әйтәйек, Ирәмдек булһа...

Әйткәндәй, Ямантауҙан йыраҡ түгел Ҡырандыҡ тигән урын да бар. Ҡыран - ҡыйралыш, ҡырғын һүҙенең боронғо варианты. Урал батыр эпосында, мәҫәлән, "Илгә бер ир тыуыр, тип, дейеүҙәр менән йыланға бер көн ҡыран һалыр, тип" тигән һүҙҙәр бар. Был тауҙарҙың бер тирәләрәк булыуы күпте һөйләй: Урал батырҙың ен-шайтанды ҡырған урыны - Ҡырандыҡ, мәйеттәрен өйөп һалған урын - Ямантау. Эпостың был өлөшөндә реаль тарих ятыуы ла ихтимал. Халҡыбыҙҙы баҫып алған берәй халыҡты, унан тел йәшерер өсөн, ен-шайтан тип атауҙары ла мөмкин.

"М" менән "н" өнө сиратлашыу телебеҙҙә тәбиғи күренеш бит, Ирәмәл менән Ирәндек атамаларын сағыштырғанда, бының шулай булыуы, нигеҙендә "ирәм" һүҙе ятыуы бик ихтимал.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Әйберләтә яҙманың, "ҡош теле"нең башҡорт халыҡ йырҙарына, шиғриәткә бәйле икенсе өлөшө лә бар. Уныһын алдағы һандарҙың береһендә һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итербеҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**




* * *

...Ҡаршыһында ултырған вайымһыҙ ғына күренгән ябай, бер ҡатлы, әле бер ниндәй ҙә тормош тәжрибәһе булмаған Наҙгөл Зәлифәнең үкенесле йәшлек йылдары сәхифәләренә нығыраҡ үтеп ингән һайын өлкәнәйә барҙы кеүек. Әңгәмә тағы дауам итте, Зәлифә тағы хәтирәләргә сумды...

...-Һөйөнсө, бикәс, һиңә хат бар! - тип өйгә ышылдап килеп инде әллә нисә йылдар элек үк Зәлифәгә еңгә булып киткән Мәймүнә.

- Кемдән, еңгә? - Зәлифә еңгәһенең ҡулындағы хатҡа үрелде.

- Бейе! Бейемәһәң - әйтеш юҡ... - Мәймүнә шаян йылмайып, ҡулын тартып алды.

-Э-э-й, - тип Зәлифә шаҡтай тумалаҡланып киткән еңгәһенең бөйөрөнә төрттө, - моғайын, берәй налоговый йә пенсионныйҙандыр инде. Ну, ярай, - ул тыпырҙарып, бейеп әйләнде.

-Сәлимәкәйҙе хәтерләйһеңме?

- "Мәрйә" Сәлимәме? Хәтерләмәҫкә ни...

Хатты икәүләп уҡынылар. Ҡунаҡҡа саҡырып яҙған Сәлимә. Онотмаған. Телефонының номерын да һалған. Шылтыратып, илаша-көлөшә Сәлимә менән оҙаҡ ҡына һөйләшеп алдылар. Әммә телефондан һөйләшеү осрашыуға етмәй шул. "Мәрйә" Сәлимәне барып күрергә ҡарар итте Зәлифә. Тәүҙә Мәймүнә еңгәһе менән икәүләшеп барырға ла уйлағайны.

-Үҙең генә барып кил инде. Минең ана бер түгел ике һыйырым быҙауларға тора, - тине Мәймүнә. - Өҫтәүенә, Хәбир ағайың санаторийға китте. Минән күү-үп итеп сәләм әйт тә ҡуй...

Мәймүнәнең нисек еңгә булып киткәнен иҫкә төшөрҙө Зәлифә. Теге ваҡыт үҙе прописканан төштө лә, Мәймүнәне лә ай-вайына ҡуймай өгөтләп, фабриканан эштән бушаттырып, ауылдарына алып ҡайтып киткәйне шул. Ҡайтып, ата-әсәһе менән күрешеп, хәл-әхүәл белешкәс тә, әхирәтен туп-тура Хәбир ағаларына алып килде. Һеңлекәшенең кем менән һәм ниндәй маҡсат менән үҙенең өйөнә килгәнлеген Хәбир ағаһы шундуҡ аңланы. Ағаһын өгөтләргә лә тура килмәне. Ҡасандыр хаттарының береһендә Зәлифә уға ошо Мәймүнә исемле "ғәләмәт шәп" әхирәте хаҡында яҙғайны. Бергәләп төшкән фотоһын да ебәргәйне. Тимерҙе ҡыҙыуында һуғып ҡалырға ниәтләнеп ҡайтҡан Зәлифә, ана шулайтып, аталарынан айырым, яңғыҙы ҙур бер өйҙә йәшәгән ағаһына Мәймүнәне димләп алды ла бирҙе. "Еңгәй итеп алам", тигән һүҙендә торҙо. Утыҙҙан әле генә аша атлағайны бит улар... Ана, хәҙер еңгәһе Хәбир ағаһы менән ике ул үҫтереп, дүрт һауын һыйыры, тиҫтәләгән ваҡ мал аҫрап, һин дә мин теттереп йәшәп яталар. Эшһөйәр ағаһы ауыл осона Зәлифәнең үҙенә бер өй һалып бирҙе. Һыйырға, тип, бер танаһын да йәлләмәне. Атаһы менән әсәһе элекке өйҙәрендә үҙ-ара көңгөр-кәңгер йәшәй бирҙеләр. Тәүҙәрәк атаһы кинйә ҡыҙын башҡа сығарырға ла теләмәгәйне. Әсәһе "Йә, ярай, атаһы, йәштәр ни, айырым йәшәргә ынтыла инде ул. Уларҙың да үҙҙәренә килер ҡунаҡ-мунаҡтары, әхирәт-мәхирәттәре була. Ағаһы уға тип тәғәйенләп һалып биргән йорт та буш тормаһын инде..." тип әйткәс, йомшаҡ күңелле Ханнан ағай, ахырҙа, риза булды. Бәхеткә, улар ҡыҙҙарының үткәнен һорашып, әллә ни маҙаһыҙламанылар.

Ҡайтҡанына күп тә тормай, синыфташы Шәрифйән Зәлифәне ҡатынлыҡҡа һоратты. Әле Хәбир ауыл осондағы уның өйөнә йәнәш кенә йорт һала башлағас та, буласаҡ өйҙөң Зәлифә өсөн икәнен белеп алып, бик тә һөйөнгәйне Шәрифйән. Хатта буш ваҡыт табып, Хәбиргә ярҙамлашып та йөрөнө. Мәктәптә уҡыған саҡта уҡ "Шериф" ҡушаматлы был ҡыйыуһыҙ малай Зәлифәгә күҙ атып йөрөй торғайны. Әммә, ауылдағы иң сибәр ҡыҙға был хаҡта әйтергә баҙнат итмәне... Хәйер, баҙнат иткән хәлдә лә, нисек килеп сығырын кем белә инде. Яҙмыш шулайҙыр, күрәһең. Ҡатыны Сәриә ике йыл элек яман шештән вафат булып, дүрт йәшлек улы менән тороп ҡалды Шәрифйән. Улын - Сабирын яңғыҙы ике йыл буйы ҡараны. Һаман да буйҙаҡ йөрөү ҙә ялҡыҡҡандыр. Ике һыйырын да үҙе һауа бит, өҫтәүенә. Сварщик булып эшләгән Шәрифйәндең өс ауылға бер генә "алтын ҡуллы" һөнәрмән тигән даны ла бар. Башҡа күп буйҙаҡтар кеүек, урам буйлап эсеп-месеп тә йөрөмәй. Зәлифә ситтән күсеп ҡайтып, ағаһы һалып биргән күрше өйҙә йәшәй башлағас та, юҡ йомошон бар итеп, уның өйөнә ингеләй башланы. Йә шырпыһы, йә тоҙо "бөткән", йә иһә магазиндан икмәк алырға онотҡан күршеһе һәр саҡ запаслы булған Зәлифәнән үтескә алып торғолай, ә унан, иртәгеһенә үк мотлаҡ бурысын кире индереп бирә. Буш ваҡыт табып, Зәлифәнең утынын яра, йә иһә урамындағы юҡ-бар ҡарын көрәп ташлай. Шәрифйәндең Зәлифә тирәһендә шулай әүҙемләшеүе, унда-бында уға мәғәнәле итеп күҙ ташлауы "беҙ бер-беребеҙгә кәрәкбеҙ, Зәлифә", тип әйткән һымаҡ. Етмәһә, ауылда бынабына улар хаҡында әллә ниндәй ғәйбәт-фәлән сығырға торғаны ла һиҙелә. Быны аңламаҫҡа, Зәлифә ун биш-ун алты йәшлек үҫмер ҡыҙ түгел дә. Ауылда "Яусы" тигән даны таралған Хәнифә әбей аша яусылатҡас, оҙаҡ уйламаны, сыҡты ла китте шул Шәрифйәнгә. Ул саҡта ауылдарҙа дин тотҡан, дини уҡыуҙы белгән кешеләр юҡ кимәлендә ине. Шунлыҡтан, егерме биш саҡырымда ятҡан Ҡоләмбәт ауылынан Тимерғәле мулланы алып килеп, никах уҡыттылар. Зәлифәнең мал-тыуары, ҡош-ҡорто ла бергә ҡушылғас, ошо ике йорттан бай ғына бер хужалыҡ барлыҡҡа килде лә ҡуйҙы. Араларын бүлеп торған ҡоймаһын да һүтеп үк ташланы Шәрифйән. Бер йылдан инде үҙҙәренең бер ҡыҙы доъяға килде. Айгизә тип исем бирҙеләр уға. Өс йылдан ашыу үҙенең әсирлектә йөрөгәнен Мәймүнә еңгәһенән башҡа бер кемгә лә, әлбиттә, һөйләмәне Зәлифә һәм бер ҡасан да һөйләмәйәсәк...

Хәҙер инде Шәрифйәндең эйәрсән килгән улы Сабир ҙа, ҡыҙҙары Айгизә лә үҫеп етеп, һәр береһе үҙаллы ғаилә ҡорған, бала-сағалары ла бар. Сабир ғаиләһе менән Сургут ҡалаһында йәшәй. Айгизәһе күрше районда кейәү менән фермер хужалығы төҙөп, әле йәш кенә булыуҙарына ҡарамаҫтан, етеш кенә йәшәп яталар, әдхәмдулиллаһ.

Зәлифәнең намаҙ тәртиптәрен, ислам йолаларын өйрәнеп, дин юлына баҫҡанына ла әллә нисә йыл инде. Аллаһу Тәғәләгә көн дә шөкөр итеп, зекерҙәр әйтеп йәшәй ул. Тик тормош юлының бер киҫәге боронғо йырҙағы Зәлифәнең яҙмышы менән иҫ китмәле оҡшаш булыуын бер ни менән дә аңлата алмай ул. Бәлки, был ябай тап килеү генәлер. Бәлки, был бөтә башҡорт ҡыҙҙарына, ҡайһы дәүерҙә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, һәр саҡ уяу булырға кәрәклеген иҫкәртеүҙер. Икенсенән, бер әҙәм балаһы ла был донъялыҡта гонаһһыҙ булмай. Шуның өсөн дә тереклектә Аллаһ собхәнә үә Тәғәләгә фарыз ғибәҙәттәрҙе ҡылып, уның алдында тәүбә итеп, гонаһтарыңды ғәфү итеүен үтенеп, әхирәткә лә әҙерләнеп барырға кәрәклегенә инанды Зәлифә. Балаларының зиһененә лә ана шул хаҡиҡәтте һеңдереп үҫтерҙе. Әле Сәлимә әхирәтенә лә был хаҡта дәғүәт яһарға ниәтләп бара әле ул, иншаллаһ...

* * *

Поезд туҡ-туҡ килеп рельстарҙы һанай-һанай Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күперҙе үтә башланы. Өфө тауы башында Салауат батырҙың һыны күренеүгә Наҙгөл әңгәмәһен тамамлаған Зәлифәгә шундайын көтөлмәгән хәбәрен әйтеп ысҡындырмаһынмы:

-Мин барыһын да аңланым, Зәлифә апай, бөгөн кис поезға кире ултырам, көндөҙ Өфөләге уҡыу йорттарында уҡыған ауылдаштарымды барып күрәм дә. Үҙем дә алдағы йыл уҡырға инергә уйлайым...

-Ә ниңә, Мәскәүгә бармайһыңмы ни?

-Юҡ, бармайым, апай. Өйҙән сығып киткәндә әсәйем дә, атайым да был сәфәремде хупламағайны. Мин хәҙер, һеҙҙең тормошоғоҙ хаҡында белгәс, уларҙың ниңә мине ситкә ебәрергә теләмәгәнен беләм инде...

Өфөгә барып етеп, тимер юл вокзалында Наҙгөл менән хушлашып, автобусҡа ултырғас, күҙ йәштәренә ирек бирҙе Зәлифә. Аллаһы Тәғәләнән ошо наҙлы ҡыҙ балаға аҡ бәхеттәр һорап, илай-илай доғаһын ҡабатланы ул...

**(Аҙағы).**

ХӘТЕРКИТАП

# ТОТАЛМАНЫ, ЗНАМЫ!



**Төрлө йәштәге яҙыусылар, бигерәк тә яҡташ ҡәләмдәштәр менән яҡындан танышыу 1968 йылда - Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә мөхәррир булып эшләү дәүерендә башланды. Кескәйҙәр өсөн тиҫтәнән артыҡ китап сығарған, әҫәрҙәре менән балалар һәм өлкәндәр күңелен яулап өлгөргән райондашым Фәүзиә апай Рәхимғолова менән дә ошо осорҙа танышылды.**

Яҡташлыҡтанмы, әллә башҡа берәй яҡынлыҡтанмы, нәшриәткә килһә, Фәүзиә апай тыйнаҡ ҡына йылмайып, миңә бер нисә һүҙ әйтмәй китмәй ине "Нимәләр ижад итәһең, апай?" тип һораһаң: "Бына ошо алдымда торған ҡустым яҡтарлыҡ берәй шиғыр яҙып булмаҫмы тип йөрөйөм", - тип тағы ла ихласыраҡ итеп, кеткелдәп кенә көлөп ҡуя торғайны. Былай тип әйтеүенең сәбәбе лә бар. Нәшриәткә бер килгәнендә һөйләшеп торғанда мин:

*Ботинкамды үҙем кейәм*
*Уң аяҡҡа, һул аяҡҡа.*
*Ниңә улар ҡарап тора*
*Икеһе ике яҡҡа?! -*

тигән шиғыр юлдарын яттан әйтеп һалдым. Шулай итеп үҙен дә, ижадын да хөрмәт итеүемде белдерҙем. Апайым шатлығын һис йәшермәй, "Молодец, яҡташ", тип арҡамдан һөйөп алды. Быны мин бары Фәүзиә апайға ярарға теләп, уның күңелен күтәреү өсөн генә эшләмәнем, әлбиттә. Шулай булғанда ла ғәйеп булмаҫ ине. Сөнки ул ғүмере буйы намыҫлы, аҡыллы, тормошон хис-тойғолары ҡушҡанса ҡорған, тәүҙә уҡытыусылыҡ, һуңынан ижад менән йәшәгән, юғары урындар биләмәгән әҙибә булды.

1978 йылдың сентябрендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы беҙҙе, бер төркөм яҙыусыларҙы, республиканың төньяҡ райондарына игенселәр менән осрашыуҙарға ебәрҙе. Борай районында йөрөп ятабыҙ. Иген баҫыуҙары аша үтеп барғанда шундай күренешкә тап булдыҡ: әллә нисә механизатор, комбайн һәм башҡа машиналарын туҡтатып, игене урылған баҫыуҙа шау-шыу килеп, ҡысҡырышып-көлөшөп, көпә-көндөҙ бер ҡуян балаһын баҫтыра. Әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа бәргеләнеп сапҡан бахырҙы ниңә тоторға булғандарҙыр - уныһы билдәһеҙ. Бына бер саҡ теге ҡуян балаһы, беҙҙе йөрөткән машинаның алдынан ғына сабып үтеп, юлдың икенсе яғына сыҡты. Шоферыбыҙ ҙа ҡуян ҡыуырға төшөп китте. Ниндәй шайтан ҡотортҡандыр, урынымдан ырғып тороп, мин дә "ҡыуыусылар отряды"на ҡушылдым. Төрлө яҡлап, ихахайлап, оҙаҡ ҡына ҡыуҙыҡ гонаһһыҙ йән эйәһен - тотторманы. Ете-һигеҙ ир-аттан сосораҡ булып сыҡты, ҡойроғон ғына күрһәтеп, урман эсенә инеп юғалды...

Аһ-уһ килеп, машинаға менеп ултырғас, Фәүзиә апай йылмайып миңә боролдо ла:

*Риф ҡустым ҡыуҙы ҡуян,*
*Тоталманы, знамы!*



# МАТУРЛЫҠТЫ ТОЙОУ ӨСӨН...

## күңелеңдә матурлыҡ булырға тейеш

(Башы 6-сы биттә).

**Хазина:** Рәсем төшөрөү менән ныҡлап шөғөлләнә башлағас, тәбиғәткә мөнәсәбәтем шул тиклем үҙгәрҙе. Пейзаж яратам, ауылыбыҙ эргәһендә генә урман бар, шуны форсат төшкән һайын һүрәткә төшөрәм. Бер урманды күпме төшөрөргә була, тип әсәй аптырай, ә һүрәттәр һәр саҡ яңыса килеп сыға. Ғөмүмән, урмандарыбыҙ, ҡырҙарыбыҙ, йылғаларыбыҙ һүрәттәрҙә генә һаҡланмаһын, кеше уларға иғтибарлыраҡ, һаҡсылыраҡ булһын ине.

**➔ Халҡыбыҙҙың милли батыры Салауат Юлаевтың образына күп рәссамдар мөрәжәғәт иткән. Һеҙ уны ниндәй итеп һүрәтләр инегеҙ?**

**Зөһрә:** Мин Салауатта уның батырлыҡ, ғорурлыҡ сифаттарын һынландырырға тырышыр инем. Башҡорт батыры мотлаҡ һыбай булырға тейештер инде. Батырлыҡ кеүек сифатты рәсемдә нисек сағылдырырға була, тиһегеҙме? Рәссам ижадында, ул ниндәй генә жанрҙа башҡарылмаһын, күҙҙәр ҙур роль уйнай. Салауаттың батырлығы уның күҙҙәрендә, шулай уҡ йөҙөндә сағылыр ине.

**Айзилә:** Минең аңымда Салауат иң тәүҙә рухы менән көслө шәхес. Үҙенең тыуған илен, ерен яратҡан, халҡы иректә йәшәүен теләгән, бының өсөн үҙенең ғүмерен йәлләмәгән. Икенсенән, ул минең өсөн шағир, шуға ла Салауаттың портретын лирик герой булараҡ ижад итер инем. Ул мотлаҡ үҙебеҙҙең Башҡортостан ерендә, Урал тауҙары янында баҫып торор һәм ҡулында ҡурайы булыр ине.

**Зөһрә:** Айзилә менән тулыһынса килешәм, Салауат Юлаев яугир булһа ла, уны яу яланында һүрәтләге килмәй. Нисек кенә тимә, яу - ул асыу, ҡара көс, үлем, кире энергия менән бәйле. Салауат яугир булһа ла, ул илен, ерен, тәбиғәтен һаҡлап ҡулына уҡ-һаҙаҡ алған. Бына шуның өсөн дә милли геройыбыҙҙы тәбиғәт фонында төшөрөү дөрөҫ булыр ине. Шул саҡта ғына уның эске донъяһын, күңел матурлығын күрһәтеү мөмкин буласаҡ.

**➔ Ҡасим Дәүләткилдиевтың эстетик ҡараштары ҡул эштәре менән биҙәлгән йортта үҫешкән. Шаршау, балаҫ, ҡайылған таҫтамалдар, агастан һырлап яһалған һауыт-һаба, милли кейемдең сағыу төҫтәре, ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәнеү әйберҙәре әле лә тәүге матурлыҡ дәрестәре булып иҫәпләнә аламы?**

**Айзилә:** Башҡорт халҡы бик нескә зауыҡлы милләт, уларҙың ҡул менән эшләгән әйберҙәре һәр береһе юғары сәнғәт өлгөһө булып тора. Дәүләткилдиев заманында ғына түгел, әле лә беҙҙең зауыҡыбыҙ ошо ҡул эштәренә ҡарап формалаша, тип әйтергә була, сөнки халҡыбыҙ был кәсеп-шөғөлләрен беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлап килтереп еткерә алған. Бәләкәй саҡта өләсәйемдең өйөндә эленеп торған милли кейем минең өсөн әллә ниндәй зиннәтле әйбер булып тойола, шуға һүрәттәремдәге ҡыҙҙар мотлаҡ башҡорт кейемендә була ине. Төҫтә тойомлау һәләтен дә үҫтерә улар. Мин акварель яратам, сағыу төҫтәрҙе үҙ итеүем тап ошо халыҡ көнкүреше әйберҙәре аша килгәндер, тип уйлайым.

**Зөһрә:** Ҡорама юрғандар, йөндән һуғылған балаҫтар, кейеҙ әйберҙәр әле лә һәр кемебеҙҙең өйөндә бар. Уларға ҡарап, өләсәйҙәребеҙҙең профессиональ рәссамдарҙан да оҫтараҡ, зауыҡлыраҡ булғанын аңлайһың. Гимназияла ла традицион халыҡ кәсептәренә нигеҙләнгән түңәрәктәр бар. Гобелен, энә менән һүрәт туҡыу, сигеү, һарыҡ йөнөнән әйберҙәр эшләргә өйрәнәбеҙ. Йыл һайын туғыҙынсы һәм ун беренсе кластар йомғаҡлау эше тапшыра, унда таҫтамалдар сигелә, милли кейемдәр тегелә. Әйткәндәй, бер егетебеҙ милли кейемдәр тегеп тә һынау тотҡайны.

**Хазина:** Әлбиттә, һынлы сәнғәттә ир-егеттәр генә шөғөлләнә торған шөғөлдәр ҙә бар. Мәҫәлән, беҙҙең егеттәр линогравюра менән шөғөлләнә, агастан һырлап һындар эшләргә өйрәнә. Ә шулай ҙа ижади кешеләр араһында ҡыҙҙар, егеттәр һөнәренә бүленеш юҡ.

Беҙ тыуған йортобоҙҙан йыраҡ йәшәйбеҙ, ә шулай ҙа үҙенсәлекле башҡорт донъяһын гимназияла ла тоябыҙ. Мәҫәлән, музейҙа башҡорт халҡының һауыт-һабаһы, кейем-һалымы, көнкүреш әйберҙәре һаҡлана. Гимназияның коридорҙары, кластар уҡыусыларҙың һүрәттәре, башҡа эштәр менән биҙәлгән, уларҙың күбеһе башҡорт темаһына арналғанға күрә, үҙебеҙҙең башҡорт гимназияһында икәнебеҙҙе һәр һулышыбыҙ менән тойоп торабыҙ.

**Эльвина:** Һүрәт төшөргәндә кәйефебеҙ яҡшы булһын өсөн оҫтаханаларҙа һәр саҡ йыр-көйҙәр яңғырап тора. Төрлө классик музыканан тыш, "Гөлнәзирә" кеүек башҡорт халыҡ көйҙәрен дә тыңлайбыҙ, йыр-көйҙәр композиция төҙөгәндә лә, төҫтәр һайлағанда ла ярҙам итә.

**➔ Бөгөн һатыуҙа башҡорт милли орнаменттар ҡулланып тегелгән заманса көндәлек кейемдәр булһа, барыһы ла уларҙы һатып алыр һәм яратып кейер ине, моғайын. Арағыҙҙа дизайнер һөнәрен һайларға теләүселәр ҙә барҙыр, һеҙ был кейемдәрҙе нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Зөһрә:** Башҡорттар борондан үҙ кейемдәрендә төрлө йөнлек тиреләрҙе әүҙем ҡулланған. Тик бөгөн, башҡорт милли кейеме тегәм, тип, йөнлектәргә зыян килтереү урынһыҙ булыр ине. Шуға мин уңайлы ла, йылы ла, файҙалы ла булған материал тәҡдим итер инем һәм һарыҡ йөнөнән баҫылған кейеҙҙән матур кейемдәр тегер инем.

**Эльвина:** Ғөмүмән, кейем уңайлы булырға һәм ҡиммәтле булмаған туҡыманан тегелергә тейеш. Кейемдә милли орнаменттарҙы ҡулланыуға килгәндә, мотлаҡ боронғо биҙәктәрҙе күсереп ҡуйыу кәрәкмәйҙер, уларҙы стилләштереп ҡулланыр инем.

**Айзилә:** Был хаҡта уйларға кәрәк. Ябай ғына әйберҙе лә зауыҡлы кейемгә үҙгәртеп тегергә була бит. Бына, мәҫәлән, мин кейгән ошо блузканы стилле кейемгә әүерелдереү өсөн яһалма тиренән, бәрхәттән тегелгән ҡайыш ҡулланыу ҙа уны бөтөнләй икенсе итеп күрһәтәсәк. Рәссам булыу тормошта миңә шул тиклем ярҙам итә, төҫтәрҙе тояһың, хатта икенсерәк кейенә башлайһың, сөнки һин төҫтәрҙе бер-береһенә ҡуша беләһең.

**➔ Милли республиканың баш ҡалаһы булараҡ, Өфөнөң архитектураһын ниндәй итеп күрергә теләр инегеҙ?**

**Айзилә:** Мин Өфөнө яҡтыраҡ итеп күргем килә, сағыуыраҡ төҫтәр күберәк булһын ине. Башҡортостандың баш ҡалаһы итеп күрһәтергә теләһәк, быға орнаменттар ярҙамында ла өлгәшеп була. Башҡорт шағирҙарына, ғалимдарына, батырҙарына һәйкәлдәр күберәк булһын ине.

**Эльвина:** Сит ҡитғаларға эйәреп, быяланан торған биналар күп төҙөйбеҙ. Был матур күренә лә, тик уларҙы ла башҡорт орнаментлы мозаика формаһында эшләргә булыр ине.

**Хазина:** Миңә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры бинаһы оҡшай. Шундай матур, көнсығыш стилендә төҙөлгән, стилләштереү ҙә бар, бер нәмә артыҡ түгел.

**Гүзәлиә:** Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендәге майҙан матур. Конгресс-холл бинаһында, мәҫәлән, материал бик уңышлы ҡулланылған, бинаның хәрәкәте лә күренә. Тик уның эргәһендәге йорттар бик күренекһеҙ тойола.

**Айзилә:** Ә ниңә Өфөнө, беҙҙең гимназияның бинаһы кеүек итеп, төрлө төҫтәргә буямаҫҡа? Бик күңелле булыр ине.

**Зөһрә:** Гимназиябыҙ бинаһының тәҙрәләре ҙур булғанлыҡтан, кластарҙа шул тиклем яҡты. Бигерәк нурлы шул беҙҙең гимназиябыҙ. Коридорҙағы тәҙрәләр бигерәк тә күркәм, ҡайһыһы - бәләкәй, ҡайһыһы - ҙур, ә беренсе ҡаттың бер стенаһы тотош быяланан тора. Минеңсә, беҙҙең гимназияның бинаһын балаларҙы, архитектураны бик яҡшы белгән кеше эшләгән. Әйткәндәй, уның архитекторы беҙҙең гимназияны тамамлаған.

**➔ Шүлгән мәмерйәһе стеналарына һүрәт төшөрөүселәрҙән башланған һынлы сәнғәтте бөгөнгө компьютерлаштырылған заман ҡыҫырыҡлап сығарып ҡуймаҫмы икән?**

**Гүзәлиә:** Юҡтыр. Шулай ҙа бөгөн компьютер ярҙамында һүрәт төшөрөү менән күптәр мауыға. Ҡайһы бер уҡыусыларға компьютерҙа һүрәт төшөрөүе еңелерәк.

**Зөһрә:** Балалар хәҙер компьютерҙа йәнһүрәттәр төшөрә, конкурстарҙа ҡатнаша. Миңә лә анимация эшләү оҡшай ине, хәҙер ул дәрес программала юҡ. Һәр яңылыҡты, шулай уҡ компьютер кеүек юғары технологияларҙы кире ҡабул итергә, ул беҙгә кире тәьҫир итер тип ҡурҡырға кәрәкмәйҙер. Рәсем-һүрәт - ҡағыҙға ғына түгел, ҡомға ла, тротуарҙарға, диуарҙарға ла, шулай уҡ компьютерҙа ла төшөрөлөргә мөмкин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гимназия-интернаттарҙа балалар белем алыуҙан тыш, шәхес булараҡ формалаша, социализация үтә, тормошҡа маҡсаты барлыҡҡа килә, ә сәнғәт йүнәлешендәге уҡыу йорттарының тағы бер ҙур әһәмиәте бар - улар балаларға эстетик тәрбиә бирә, матурлыҡты күрергә өйрәтә. Матурлыҡты үҙенең күңелендә матурлыҡ булған кеше генә күрә ала. Әгәр ҙә кешегә матурлыҡ оҡшай икән, ул бар ерҙә матурлыҡ ҡына эҙләйәсәк һәм табасаҡ та. Республика художество гимназия-интернатының милли сәнғәт һәм милләтебеҙ өсөн бөгөнгө йәш аңғәмәселәребеҙ кеүек шәп уҡыусылар тәрбиәләүҙәге эшендә уңыштар теләйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

---

*Сөнки булған аяғында*
*Качество знагы! -*

тип кеткелдәп көлөп ебәрҙе. Барыбыҙ ҙа рәхәтләнеп ауыҙ йырып алып, бер аҙ барғас: "Мин был шиғырҙы, бер аҙ мөхәррирләп, башҡортсалаштырырға булдым", - тинем. Апайым башын ғына ҡаҡты. Үҙемдең шиғыр шулайыраҡ яңғыраны:

*Кеше ҡуян ҡыуа тиеп,*
*Риф тә ҡыуҙы ҡуян.*
*Тоталманы: аяғында*
*"Сифат тамғаһы" булған.*

Тағы ла гөрләшеп, көлөшөп алдыҡ. Тик сәфәрҙәш ҡәләмдәштәр барыбер Фәүзиә апайҙың вариантын хупланы.

Фәүзиә апайҙың шаян зирәклеген, йор һүҙгә маһирлығын, кәрәк саҡта "һә" тигәнсе шиғыр, йыр-таҡмаҡ сығарыу сәсәнлеген ошо сәфәрҙә Балтас районында йөрөгәндә лә күреп-ишетеп белдек. Район үҙәгендә беҙҙе йоҡлатырға урын таба алмай интектеләр. Сәғәт төнгө 12-ләрҙә генә бер училищеның дөйөм ятағына алып барҙылар. Унда инә алмай, ике сәғәткә яҡын урамда йөрөнөк. Ныҡ өшөй башлағас, училище урамында, бейей башланыҡ. Ә Фәүзиә апайыбыҙ, ҡул сабып, беҙҙең күңелде күтәреп, шундай һүҙҙәр менән таҡмаҡлап торҙо:

*Рәхәтләнеп аҡ ташта,*
*Әй бейейбеҙ Балтаста.*
*Ниңә беҙгә урын кәрәк,*
*Мөмкин бит йоҡламаҫҡа...*

Бына ошо яғымлы юморға әүәҫлеге, донъя-тормоштоң ят-яман күренештәренә һиҙгерлеге, ҡәләменең шаҡтай сәнскеле, энәле үткер һүҙҙәргә байлығы Фәүзиә апай Рәхмиғолованы, бигерәк тә ғүмеренең һуңғы йылдарында, "Һәнәк"тең дә әүҙем авторҙарының береһе иткәндер, моғайын. Йыш килә торғайны ул редакцияға. Буш ҡул менән йөрөмәне. Күберәк шиғырҙар алып килде. Улар араһында:

*Ғәйепле, ҡысҡырып,*
*Ғәйебен ҡаплар,*
*Ғәйепһеҙ, шым ҡалып,*
*Әҙәбен һаҡлар,* - кеүек, аҡылға, мәҡәлдәгесә тапҡырлыҡҡа ҡоролған ҡыҫҡалары ла, борон-борондан кешеләр баҡса-ҡуралары ҡараҫҡыларҙы ни өсөн ҡуйыуҙарын оҙон ғына итеп тасуирлағандары ла була торғайны... Эйе, төрлө бюрократ, ялағай, эскесе, маҡтансыҡ, ялҡау һәм әрәмтамаҡтар - олоһо-кесеһе - һәммәһе шағирәнең осло ҡәләменә эләгеп торор ине.

Эйе, сабый, ябай һәм хыялға бай күңелле ине Фәүзиә апайыбыҙ. Саф ижадсы күңеле ине унда. Әҙәбиәтебеҙҙә ул шундай һында ҡалды. Һағындырыр йән эйәһе, ижадсы, моғайын, шулай булалыр...

**Риф МИФТАХОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙЫШ ЙЫУЫНЫУ...

## яҡшымы, насармы?

■ Америка ғалимдары болгар боросоноң быға тиклем билдәле булмаған үҙенсәлектәрен асыҡлаған. Был йәшелсә онкологик ауырыуҙар хәүефенән дә һаҡлай, кешенең нервылар системаһына яҡшы тәьҫир итә, инсульт сирен булдырмай. Болгар боросонда эндорфин - бәхет гормоны бүленеп сығыуға ярҙам иткән хуш еҫле матдәләр бар. Ул кешегә стресс һәм хәүефтәрҙән йыраҡ торорға ярҙам итә. Капсаицидар баш ауыртыуынан ҡотҡара, артриттан һаҡлай, В6 һәм В9 витаминдары ҡан тамырҙары ҡартайыуы процесын яйлата. Каротоноидтар иммун системаһын нығыта, ҡояш нурҙарынан һаҡлай, күҙәнәктәр араһындағы бәйләнеште яҡшырта. Болгар боросон яратҡан ҡатын-ҡыҙҙар түш яман шеше менән һирәгерәк ауырый.

■ Израиль ғалимдары көн һайын йыуыныу организм өсөн бик зыянлы, тип белдерә. Һыу менән һабын тиренең бәшмәк һәм бактериянарҙан һаҡлаусы тәбиғи ҡатламын йыуып төшөрә, тимәк, уның кислота-һелте балансын боҙа. Шулай уҡ йыш йыуыныу тиренең D витаминын синтезлаусы зоналары боҙолоуына килтерә, шуға ла организмда был кәрәкле элемент етешмәй башлай. Был тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Рахель Луцати көн һайын иң кәрәкле гигиеник процедураларҙы ғына башҡарырға, ә душты аҙнаһына ике тапҡыр инергә кәңәш итә.

■ Эксетер медицина мәктәбе хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, оло кешеләрҙең бер туктауһыҙ ауырыуына зарланыуы уларҙың сәләмәтлегенә кире йоғонто яһай. Был оло кешеләрҙең үҙен нисек тойоуына психологик факторҙың мөһимлеген аныҡлай. Эксперимент барышында бер нисә йөҙ оло кешегә анкета һорауҙарына яуап бирергә ҡушалар. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ауырыуҙарға зарланыу һәм ҡартлыҡ тормошҡа ҡыҙыҡһыныуҙың юҡҡа сығыуына һәм физик әүҙемлектең түбәнәйеүенә килтерә, был сәләмәтлек торошона кире йоғонто яһай. Шуға ла ғалимдар ҡарттарға зарланыуҙан туктарға һәм әүҙем йәшәү рәүеше алып бара башларға саҡыра.

■ Кешене төрлө бактериялар уратып алған. Уларҙың һаны миллионға етә, ти белгестәр. Әле беренсе саң һурҙырғыс уйлап табылғанға тиклем уҡ, 18-се быуатта шотланд табибы Джон Хантер: "Саң дарыға ҡарағанда күберәк кешене һәләк итте", - тип белдерә. Ул ваҡытта табипҡа ышаныусылар күп булмаһа ла, бөгөн бының дөрөҫлөгөн белгестәр дәлилләгән инде. "Беҙ микробтар араһында йәшәйбеҙ һәм уларҙың нигеҙен үҙебеҙҙең микроорганизмдар алып тора, - ти тикшеренеүҙәр авторы, Йель университетының экология кафедраһы доценты Джордан Печиа. -Барыбыҙ ҙа йорттарыбыҙҙы һирәк йыйыштырабыҙ, әммә унда әүҙем тормош алып барабыҙ, мәҫәлән, спорт менән шөғөлләнәбеҙ, шуға ла иҙәнгә йыйылған саң өҫкә күтәрелә һәм беҙ бактерияларға "байыған" һауаны һулайбыҙ". Шулай уҡ кеше үҙе әйләнә-тирәһенә һәр сәғәт һайын 37 миллион бактерия "өҫтәп" тора, ти тикшеренеүселәр. Бүлмәләрә һауаны тикшереп ҡарағандан һуң, унда йышыраҡ осраған 15 төргә яҡын бактерияларҙың дүртәүһе кешенең тиреһендә осраған бактериялар төрөнә ҡараған. Шуға ла саңды йышыраҡ һөртөргә һәм бүлмәне елләтергә кәрәк.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҠУЯН ҠУРҠАҠМЫ?

**Үҙ уйҙарыма бирелеп, һуҡмаҡ буйлап тын ғына китеп барһам, ҡаршыма ҡуян сабып килә. Мине абайламай әле. Май айы етһә лә ҡылый күҙ һаман аҡ тунын тулыһынса ташламаған икән. Быйыл яҙ һуңлаңҡырап килә шул. Шул арала мине күреп ҡалған ҡуян ҡапыл ситкә һикереп, урман эсенә инеп юғалды. Ә шулай ҙа матур тойғолар менән оҙатып ҡалдым мин был урман йәнлеген.**



Был йәнлекте беҙ бала саҡтан уҡ яратабыҙ, буғай. Бәләкәй саҡта барыбыҙ ҙа яратып ҡараған "Тотолорһоң әле!" ("Ну, погоди") йәнһүрәте генә үҙе ни тора. Балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә яратып ҡарай был йәнһүрәтте. Төрлө мажараларға тарый-тарый уҫал бүренән ҡасҡан ҡылый күҙ барыбыҙҙы ла шатландырып, һәр ваҡыт еңеүсе булып ҡала. Балалар баҡсаһында ла ташламай беҙҙе ҡуян. "Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян, беҙгә ҡунаҡҡа килгән, ҡойроғо ҡыҫҡаҡ ҡына, ҡолағы ергә тейгән", тип һөйләп, ҡайһыбыҙ ғына Ҡыш бабайҙан бүләк алмағандыр. Ә инде Яңы йыл кисәһендә ихлас ятлаған "Ҡыш бабай менән ҡуян икеһе лә аҡ ҡына. Ҡыш бабай ҡурҡаҡ түгел, ҡуян ҡурҡаҡ саҡ ҡына" тигән юлдар күптәребеҙҙең күңелендә бөхетле мәктәп йылдары иҫтәлеге булып һаман һаҡлана.

Йәнһүрәттә бүренең танауына сиртеп, ихлас сабып йөрөгән "йәйен һоро, ҡышын аҡ, уға шулай яҡшыраҡ" ҡуяндың тормошо тәбиғәттә нисегерәк икән - мәҡәлә ошо турала. Әлбиттә, ысынбарлыҡ йәнһүрәттән айырыла инде. Бер нәмәһе тура килә - ҡуян дошманынан һәр ваҡыт ҡасып ҡотола. Ул үҙе йыртҡыс түгел, күберәген үлән менән туҡлана. Уның ҡарауы, башҡалар ҡуян итен бик яраталар. Шуға күрә һәр ваҡыт ихлас сабып йөрөргә тура килә ҡуянға. Бары бүренең танауына сиртергә генә ваҡыты ҡалмай. Уныһы мөһим дә түгел, йән күпкә ҡәҙерлерәк. Шуға күрә ҡылый күҙ ҡурҡыныс янау менән тиҙерәк шылыу яғын ҡарай. Әйткәндәй, ҡуянды бушҡа ғына "ҡылый күҙ" тип атамайҙар. Иғтибар итегеҙ әле, бүренең, айыуҙың, һеләүһендең һәм башҡа йыртҡыс хайуандарҙың күҙҙәре алға төбәлгән. Алда ҡасып барған ҡорбанына, беҙҙең осраҡта ҡуянға, төбәлгән улар. Үҙ сиратында, тәбиғәт ҡуянға ла тере ҡалырға мөмкинлек бирә - ул алға ҡарай саба, ә шул уҡ ваҡытта, башын бормайынса ғына, артҡа ла ҡарай ала. Уның күҙҙәре башының сикә өлөшөндә урынлашҡан һәм улар бер аҙ алғараҡ сығып тора. Шуға күрә, уның күҙҙәре ҡылый булып сыға. Бындай күҙҙәр ҡуян ғүмерен бик күп тапҡыр һаҡлап ҡалғандыр инде. Ҡылый күҙҙәре дошманының хәл иткес һөжүмен ваҡытында күреп өлгөрә. Шул мәлдә ул ҡыҙҡа йә ситкә, йә өҫкә һикереп, һаман алға ҡарай сабыуын белә.

Әйткәндәй, ҡуян бик шәп йүгерә - тиҙлеген сәғәтенә 50 км-ға еткерә ала. Шуға күрә уны барыны ла тура юлда ҡыуып етә алмай. Бары тик һунар этенең генә ҡыуып етеүе бар. Башҡаларға иһә уны боҫоп ултырып, аңдып ҡына тоторға тура килә. Уның ҡарауы, тәбиғәт ҡуянға оҙон ҡолаҡтар биргән. Улар ярҙамында был йәнлек һәр шикле тауышты тикшереп кенә тора. Ерҙәге дошмандарға ҡарағанда, һауанан һөжүм итеүселәр күпкә ҡурҡынысыраҡ, буғай. Ялан-дағы бөркөт, урмандағы өкө - уның тере дошмандары. Баҙнатһыҙ кешене беҙ, ҡурҡаҡ ҡуян, тигән булабыҙ. Миненсә, ҡуян "саҡ ҡына ҡурҡаҡ" түгел, ә ул һәр ваҡыт һаҡ һәм сос.

Ҡуянды күп ваҡыт көслө аяҡтары ҡотҡарып ҡала. Ләкин ошо аяҡтары уны һәр ваҡыт "һата" ла (Бына беҙҙең тел һымаҡ инде - ул бер үк ваҡытта дуҫ та, шул уҡ ваҡытта дошман да. Миҫалдар бихисап. Әммә төп теманан ситләшмәйек әле). Эш шунда: ҡуяндың тир биҙҙәре уның бармаҡтары араһында урынлашҡан. Уның тир еҫе бик көслө. Етмәһә, тороп ҡалған эҙҙә улар оҙаҡ һаҡлана. Һунар эте, әйтәйек, был еҫте 8 сәғәттән һуң да тоя ала икән. Әммә был турала ҡуян үҙе лә белә. Шуға күрә ул тегеләй-былай сабып йөрөп, бик күп ара үтеп, эҙ яңылыштыра. Тәүлегенә уртаса 2-3 км ара сабырға тура килә уға. Нишләйһең, тере ҡалам тиһәң, сабаһың инде.

Шулай ҙа тәбиғәттә күптәр ҡуянға осраҡлы рәүештә һунар итә. Эләкһә - шәп, эләкмәһә лә артыҡ ҡайғырған юҡ. Насип итһә, икенсе юлы ҡурмағанен күрһәтербеҙ әле. Ә бына һеләүһен ҡуянһыҙ йәшәй алмай, сөнки уның төп аҙығы булып ҡуян ите иҫәпләнә. Икмәк булһа, йыр ҙа булыр, тигәндәй, ҡуян күп булған урында һеләүһен "йырлап" донъя көтә.

Шуныһы һәйбәт - тәбиғәт ҡуяндар һанын кәметмәй. "Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған", тип бушҡа әйтмәйҙәр икән. Йыл әйләнәһенә ул өс тапҡыр бала таба. Тәүге бәпестәр март айында тыуа. Уларҙы кеше, шаяртып, "ҡар ҡуянҡайҙары" тип атай. Икенселәре иһә, йәй осоронда тыуа - былары "йәшел үлән ҡуяндары" тип исемләнә. Көҙгә табан тағы берҙе бәпеслэй ҡуян. Былары иһә "һары япраҡлылар" исемен алған. Бер тапҡанда 4-8 бәпәйе була. Ауырлыҡтары ни бары 100 грамм самаһы булған ҡуянҡайҙар ҡуҙғалмай ултырып ҡына үҙен һаҡлай алалар. Дошмандары уларға осраҡлы рәүештә килеп төртөлгәндә лә улар ҡасмай. "Әсәләр көтәләр улдарын" тигәндәй, бында, киреһенсә, шым ғына "балалар көтәләр әсәйҙәрен". Әсәләре төнөн 1-2 мәртәбә килеп, балаларын имеҙеп китә. Күп осраҡта улары үҙ балаһы ла булмауы бар. 8-10 көндән һуң йәш ҡуянҡайҙар үлән ашай башлай, ә шулай ҙа бер айға хәтлем барыбер әсә һөтө төп аҙыҡ булып ҡала. Бер айҙан һуң ошо ҡуянҡайҙарҙың хәүеф-мажараларҙан торған ҮҘаллы тормошо башланып китә. Ҡышты уңышлы үткәргәндәре оло ҡуяндар сафын тулыландыра. Бер уйлаһаң, ҡуян ғүмере апаруҡ оҙон ғына - ул 8-12 йыл самаһы тәшкил итә. Шулай ҙа ниндәй өлөшө "пенсионер" булып, был тормоштан китәләр - быны тәбиғәт үҙе генә белә инде.

Урманға сабып инеп киткән ҡуянға ҡарап, ошондай уйҙар тыуҙы минең башта. Уйлап ҡараһаң, уның тормошонан беҙгә һабаҡ алырлыҡ урындар байтаҡ икән. Ҡуян һымаҡ сос һәм һаҡ булайыҡ, тип әйтке килә бына. Тормоштар ниндәй генә булыуға ҡарамаҫтан, уның ағышында юғалып ҡалмайыҡ. Был ҡылый күҙгә еткереп, йылына өс бала табып булмаҫ, ахыры. Ә шулай ҙа өс йылға бер бәпәй алып торорға хәлдән килә, тип уйлайым мин. Ошо бәпәйҙәр матур ғаиләләрҙә үҫһендәр. Үҫкәндәре, мәле еткәндәрен әйтәм, әсә һөтөнән ваҡытында айырылып, ыңғай ғына үҙаллы тормоштарын башлап ебәрһендәр. Оло тормош һуҡмағында һағалап торған төрлө һынауҙарға бирешмәйенсә, матур йәшәргә насип булһын уларға!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ:**

**Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы айҡанлы гәзитебеҙҙәге "Тәбиғәт мөғжизәләре" тигән рубрикабыҙ быйыл иң яҡшы мәҡәләләргә конкурс иғлан итә. Даими авторыбыҙ Әғләм Шәрипов уны башлап ебәрҙе (18-се һанда йылан тураһында мәҡәләһе баҫылды) һәм дауам итә. Ошо авторыбыҙ кеүек тәбиғәт йәнле, тәбиғәт телен аңлаған, тәбиғәт тауышын ишетә белгән, тәбиғәттәге төрлө күренештәр, үҫемлектәр, кейек-йәнлектәр, ер-һыуыбыҙ тураһында ата-бабалар һүҙен хәтерендә һаҡлаған, тәбиғәт балаһы булған уҡыусыларыбыҙҙан мәҡәләләр көтәбеҙ. Йыл аҙағында йомғаҡ яһалып, өс еңеүсе билдәләнер, тип ниәтләйбеҙ.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

**Бер йәш егет, остазы өйрәткәнсә, ете тапҡыр "Аятел Ҡөрси"ҙе уҡып, мәҙрәсәнән өйөнә табан юллана. Юлда барғанда ҡаршыһына баштан аяҡ ҡоралланған юлбаҫарҙар килеүен шәйләп ҡала. Ҡасыуҙың файҙаһы юҡ, юлбаҫарҙар уны тиҙ арала тотоп аласаҡ һәм тағы ла ҡатыраҡ язалаясаҡ. Аҙымдарын әкренәйтмәйенсә, егет уларға ҡарай атлауын дауам итә.**

# "БИСМИЛЛАҺ" ҺҮҘЕ...



## Аллаһы Тәғәлә ебәргән яҡлаусы

Бер ни ара ҡалғас, ғәжәпкә ҡала: уны таларға, үлтерергә ниәтләнгән юлбаҫарҙар арттарына ла ҡарамай ҡаса башлай. Ғәжәпләнеүен еңә алмаған егет ҡасыусыларҙың береһен ҡыуып етә лә, ҡурҡыуҙарының сәбәбен төпсөнә башлай. Ҡото осҡан юлбаҫар, тотлоға-тотлоға: "Беҙ һине таларға һәм үлтерергә теләгәйнек. Яуыз ниәтебеҙҙе бойомға ашырырға уйлағанда ғына, һинең артыңда ете һыбайлы яугир пәйҙә булды. Уларҙың береһенең башы юҡ ине", - ти.

Егет мәҙрәсәгә әйләнеп ҡайта ла, остазына әле генә булған ваҡиғаны түкмәй-сәсмәй һөйләй. Юлға сығыр алдынан ете тапҡыр "Аятел Ҡөрси"ҙе уҡыуын да әйтә. "Ләкин доға-аятты уҡығанда, береһе алдынан "Бисмиллаh" тип әйтергә онотҡайным", ти. Остазы уға:

- "Аятел Ҡөрси"ҙе ете тапҡыр уҡығас, Аллаһы Тәғәлә һиңә ете ҡеүәтле һыбайлыны тәғәйенләгән. "Бисмиллаh"ты ҡалдырып уҡылған аят өсөн һыбайлыларҙың береһе башһыҙ булып сыҡҡан, - ти.

"Бисмиллаh", ғәрәп теленән тәржемә иткәндә, "Аллаh исеме менән" тигәнде аңлата. Ошо hүҙ менән Ҡөрьәндең беренсе аяты башлана. "Бисмиллаh" - ул бар изгелектәрҙең, яҡшылыҡтарҙың башы. Ул Ислам диненең ниндәйҙер бер символы түгел, ә кешенең Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәте лә.

Тышҡы яҡтан көслө күренеүенә ҡарамаҫтан, әҙәм балаһы күп билдәһеҙлектәр алдында ярҙамға мохтаж. Уның ихтыяждары менән бергә хәүефтәре бик күп. Бөйөк Аллаһы Тәғәләнең исеме менән ҡулланғанда ғына күңелһеҙ хәлдәрҙән, хәүефтәрҙән ҡотолорға була. "Бисмиллаh" Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешегә бүләк ителгән иң яҡшы яҡлаусы ул. Был ҡиммәтле бүләк менән етәкселек итеүсе бер ҡасан да, бер кемдән дә ҡурҡмаясаҡ. Ул һәр эшендә Һаҡлаусыһының абруйына таянасаҡ, шуның менән ғүмеренең барлыҡ һынауҙарын лайыҡлы үтәсәк.

Һәр йән эйәһе үҙенең телендә "Бисмиллаh"ты әйтә. Хатта бәләкәй генә орлоҡтар ҙа Аллаһы Тәғәлә исеме менән ҙур үҫемлектәр булып үҫә. Уларҙың ботаҡтары, тамырҙары, һабаҡтары ерҙең ҡалын ҡатламдарын, таштарҙы, асфальттарҙы ярып үтеп, күккә үрелә. Раббыбыҙ исеме менән йәшел үҫентеләр планетабыҙҙы кислород менән тултыра. Ошо һоҡландырғыс процестарҙы күреп тә, уларҙың айышына төшөнә алмаусылар, үҙҙәренең сикләнгәнлеген, аңһыҙлығын ғына күрһәтә. Изге булып ҡыланыусыларҙы күккә күтәреп маҡтап та, Ысын Изгелек күрһәтеүсене онотҡандар тағы ла мәғәнәһеҙерәк, наҙаныраҡ, ахмағыраҡ күренә. Бар рәхмәт, маҡтауҙарға лайыҡлы - Аллаһы Тәғәлә генә.

Берҙән-бер хакимыбыҙ, беҙҙе сикһеҙ ниғмәттәргә ҡойондорған Аллаһы Тәғәлә, ҡолдарынан күпте һорамай. Бары зекер - Уны иҫкә алыу, фекер - Уның бөйөклөгө хаҡында уйланыу, шөкөр - Уға рәхмәтле булыу етә. Мәҫәлән, өҫтәлгә ултырғас, аш табынын "Бисмиллаh" тип башлау - зекер, бар ошо ниғмәттәрҙең Аллаһы Тәғәлә бүләге булыуын төшөнөү - фекер, ашап бөткәс, "Әлхәмдүлилләh" (Аллаһҡа маҡтау) тип әйтеү шөкөр буласаҡ. Ябай, шул уҡ ваҡытта тотороҡһоҙ эшләгән уңыш формулаһы барлыҡҡа килә: зекер, фекер, шөкөр. Был өс төшөнсә туҡланғанда ғына түгел, һәр төрлө эшмәкәрлектә ҡулланыла.

Ҡиәмәт көнөндә уңыш ҡаҙаныусылар исемлегендә булыр өсөн, алғанда ла, биргәндә лә, башлағанда ла, тамамлағанда ла, эшләгәндә лә, ял иткәндә лә Аллаһы Тәғәлә исемен ҡулланыу мотлаҡ. Бер һөйләм менән әйткәндә, уңыш ҡаҙаныусылар исемлегендә булыр өсөн "Бисмиллаh" һүҙе менән йәшәргә кәрәк.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Ястребцов фамилиялы Юра

Уның менән таныштыҡ та, һөйләшеп алып киттек. Мин унда бөйөк эске көс тойҙом. Уның әйткән беренсе афоризмын хәтеремдә ҡалдырҙым: "Һүҙ әйтелмәгән икән, уға кеше хужа. Әгәр һүҙ әйтелгән икән, кешегә һүҙ хужа була". Ишеткәнемдең асылын уйлағансы, ул бер маһайыуһыҙ афоризмдың мәғәнәһен аңлатты. Уның икенсе һөйләмен мин шунда уҡ аңыма "яҙып" ҡуйҙым. Һәм әлегәсә уның асылын аңларға тырышам, һүҙ уйнатыуға аптырайым: "Что убило пищу вашу, то убьет и вас самих". Минең яңы танышымдың исеме Юра ине (фамилияһына иғтибар итегеҙ - Ястребцов). Ул төҙөлөш техникумын тамамлаған һәм үҙ һөнәре буйынса эшләй. Минән егерме йәштәргә кесерәк. Һүҙ донъяға ҡараш темаларына ҡағылғас, ул, философия үҙенсә бер ниндәй ҙә ҡиммәткә эйә түгел, сөнки ул эште һүҙ менән алмаштыра, тине. Бөтөн ғүмерең буйына философия менән шөғөлләнергә мөмкин, матур һәм аҡыллы итеп һөйләргә була, әммә был кешегә бер нәмә лә бирмәй, сөнки бары тик шәхестең өлөшләтә үҫешен генә тәьмин итә - бына ниндәй фекер әйтте ул. Ул мине боронғо һиндтарҙың бер нисә күнекмәһе менән таныштырҙы һәм улар миңә сәләмәтлегемде һиҙелерлек яҡшыртырға ярҙам итте. Юра аша мин практик китап яҙған яңы авторҙарға сыҡтым.

Бала саҡтан ғәҙәти булып ҡанға һеңгән йәшәү рәүешенең ҡайһы бер яҡтарына яңыса ҡарарға мәжбүр иткән һуңғы һөйләшеү хәтеремдә ҡалған. 2008 йылдың мартында Стәрлетамаҡ ҡалаһына командировкаға барҙым һәм унда коллегаларымдан ТНТ каналының ғәҙәти булмаған тапшырыу ойоштороуы хаҡында белдем. "Битва экстрасенсов" аҙнаһына ике тапҡыр күрһәтелә икән. Өфөгә ҡайтҡас, Юра менән урамда йөрөгәндә ошо тапшырыуҙы ҡарарға йыйыныуым хаҡында белдерҙем. Беҙҙең арала шундай һөйләшеү булды.

"Юра. Һеҙ, Самат Әбдрәхимович, ике йыл элек кенә, телевизорҙы бик һирәк ҡарайым, тигәйнегеҙ. Ни өсөн хәҙер яңы ғәҙәтегеҙҙән баш тартырға ҡарар иттегеҙ?

Самат. Миңә коллегаларым кешенең мөмкинлектәре хаҡында шундай тарихтар һөйләне, уларҙы үҙ күҙҙәрем менән күреп инаныу кәрәк, тип уйланым. Эйе, улар ҡайһы бер экстрасенстарҙың ябай ялғансылар булыуы хаҡында ла әйтте. Әммә ҡайһы берҙә үҙҙәре ошо ваҡиғала ҡатнашмаған кешеләрҙең күрәҙәселек һәләттәре ярҙамында барыһын да ентекле итеп һөйләп биреүселәр ҙә осраған. Мине шулар нығыраҡ ҡыҙыҡһындырҙы.

Юра. Аҡыллы кеше өсөн "ҡыҙыҡлы" тигән һүҙ бөтөнләй юҡ. Ул был һүҙҙе үҙенең лексиконынан бөтөнләйгә һыҙып ташлай һәм уны "файҙалы" тигән һүҙ менән алмаштыра. Әммә ябай кешенең "файҙалы"һы аңлы кешенең "файҙалы"һы менән тап килмәй. Аҡыллы кеше теләһә ниндәй ваҡиғаға йәки эшмәкәрлеккә уның үҙенең рухи үҫеше өсөн файҙаһы булғанда ғына ҡушыла. "Битва экстрасенсов"ты ҡарап, һеҙ үҙегеҙ өсөн бер нәмә лә алмаясаҡһығыҙ. "Ah"ылдап, "yh"ылдап ултырырһығыҙ, әммә был өндәр һеҙҙең шәхси үҫешегеҙгә бер ниндәй йоғонто яһамаясаҡ. Ә бына ике сәғәт ҡиммәтле ваҡытығыҙҙы бушҡа әрәм итәсәкһегеҙ. Һеҙҙең йәшегеҙҙә ваҡыт кеүек ҡиммәтле байлыҡты уңға-һулға ташлап, әрәм итергә ярамай. Был сәғәттәрҙе алда торған мөһим ваҡиғаларға әҙерләнеү өсөн файҙаланығыҙ.

Самат. Алда торған ваҡиғалар тип һеҙ нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ?

Юра. Үлем тип аталған был тормоштан китеү ваҡытын. Был ваҡиға етди һәм оҙайлы әҙерлек эштәре талап итә.

Самат. Был эш менән практик рәүештә ҡайҙа шөғөлләнә алам?

Юра. Бының өсөн крия-йога буйынса күнекмәләргә йөрөргә тәҡдим итәм.

Самат. Йоганың күп төрҙәрен беләм: бхакти-йога, джнана-йога, раджа-йога һ.б. Уларҙың ҡайһы берҙәрен хатта ҡулландым да. Ә бына крия-йога хаҡында беренсе тапҡыр ишетәм.

Юра. Әгәр ваҡытығыҙ булһа, мин һеҙгә крия-йога тураһында иң мөһим нәмәләрҙе генә бәйән итә алам".

Һәм миңә ул бына нимәләрҙе һөйләне.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

142. Дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙе үҫтерегеҙ һәм нығытығыҙ, сөнки улар сәләмәт, уңышлы тормош алып барыу өсөн бик мөһим. Күптәнге дуҫығыҙға йәки оҙаҡ ваҡыт аралашҡан кешегеҙгә бер нисә йылы һүҙ әйтер өсөн генә көнөнә бер нисә минут табығыҙ. Барлыҡ дуҫтарығыҙға мөнәсәбәтегеҙҙе ихлас белдерегеҙ һәм тиҙҙән яңы үҙгәрештәр күрерһегеҙ. Яҡшы дуҫ булығыҙ һәм дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙе мөмкин тиклем оҙағыраҡ һаҡлағыҙ. Дуҫтарығыҙ күп булһа ла, яңы дуҫтар табыуҙы өҫтөнлөклө бурыс итеп ҡуйығыҙ. Был - тормоштоң күптәр мәхрүм булған иң ҙур ҡыуаныстарының береһе.

143. Майл Дэвистың "Что-то голубое" тигән дискыһын һатып алығыҙ. Был тынысландырыусы мөғжизәле джаз композициялары альбомы. Ул ауыр һәм һөҙөмтәле эш көнөнән һуң көсөргәнештән арынырға ярҙам итә. Бындай музыка - күңел өсөн.

144. Аппетитығыҙҙы күп итеп һыу эсеү иҫәбенә баҫығыҙ (көнөнә 10 стакан һыу эсеү - идеаль күләм). Һыу барлыҡ системаларҙы йәнләндерә һәм организмды таҙарта. Шулай уҡ аш һәм ҡатмарлы углеводтарға бай дөгө, картуф, макарон кеүек аҙыҡтар ашарға ғәҙәтләнегеҙ. Улар, башҡа аҙыҡтарҙан айырмалы, аҙ калория менән асығыуҙы туҡтатырға һәләтле. Беҙ, ысынлап та, нимә ашайбыҙ, шуны тәшкил итәбеҙ. Шуға күрә диета энергетиканы һәм аң асыҡлығын максимумға еткергән торошто тәьмин итергә тейешбеҙ.

